ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 ноябрь (ҡырпағай) 2018

№47 (829)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Замана беҙгә бәйлеме, әллә беҙ - заманағамы? 3



Күптән билдәле хәҡиҡәт, йәғни IX-X быуаттарҙағы башҡорт ҡалалары тураһында 7



Ике нәмә сикһеҙ: ғаләм һәм кешенең алйотлоғо 8-9



Бәхәстән бәхет тыуамы? 12



ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыуҙың ҡыҙыу миҙгеле дауам итә. Шулай итеп, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 609 һум 96 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 641 һум 16 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 550 һум 38 тингә яҙыла ала. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Етәкселәргә мөрәжәғәт итеп, ниндәй ярҙам алғанығыҙ булды? Әллә ярҙам ала алманығыҙмы?

***Эдуард БАЙСУРИН, Мәләүез районы Үрге Юлдаш ауылы, имам-хатип:*** Беҙҙең ауылдың иң тәүҙә хәл итә торған мәсьәләһе ер менән бәйле. Күршеләге Салауат ҡалаһының йылдам үҫеше беҙҙең ауылдың ер биләмәһенең әҙәйеүенә алып килә. Халыҡтың бесәнлеген, мал көтөү урындарын ҡаланың яңы райондары аяуһыҙ "йота". Яңы йорттар ҡалҡыуы, йәштәрҙең йәшәр урындары булыуы яҡшы күренеш, әлбиттә, ләкин улар Үрге Юлдаш ауылы халҡы иҫәбенә башҡарылырға тейеш түгел. Артабан да былай барһа, беҙ бөтөнләй ерһеҙ тороп ҡаласаҡбыҙ. Ә ауыл кешеһе өсөн ерһеҙ булыу һыуһыҙ ҡалған гөлгә тиң. Етәкселәргә күп тапҡыр мөрәжәғәт итеп ҡараныҡ. Ләкин улар формаль яуап биреү менән генә булыша, ә хәлде яйларлыҡ аныҡ эш юҡ. Шуға күрә, урындағы халыҡ менән референдум үткәрергә ниәтләгән инек. Ә бының өсөн 131-се Федераль законға "Урындағы халыҡтың йәшәйешенә ҡағылышлы һорауҙарҙы урында уҡ хәл итергә", тигән төҙәтмә индереү мөһим, сөнки ерҙе бүлеп биреү кеүек мәсьәлә әлеге ваҡытта федераль үҙәк компетенцияһында.

Былтырға тиклем ауыл эргәһендә законһыҙ карьер эшләп килеүе лә ерҙәребеҙҙең кәмеүенә килтерҙе. Башҡортостан Республикаһының Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 42 гектар ерҙән 570 камаз машинаһы менән 1100000 һумлыҡ 4000 кубометр ҡырсынташ сығарылған. Тик ул аҡсаның бер һумы ла ауыл өсөн тотонолманы. Ауылдың ерен файҙаланалар, тик бында йәшәгән халыҡтың мәнфәғәтен уйлап ҡараусы ла юҡ. Алыуын алғас, ни өсөн ауыл халҡының көн итеүен яҡшыртыу өсөн бер эш тә башҡарылмай, тигән һорау тыуа? Ни өсөн ауылдағы юлдар төҙәтелмәй, бағаналарға ут үткәрелмәй, магазиндар асылмай һәм башҡалар? Күп урынға мөрәжәғәттәр яҙа торғас, карьерҙа былтыр эштәр туҡтаны, ләкин ул яңынан башланмаҫ тип кем гарантия бирә ала?

Дөрөҫөн әйткәндә, ауылыбыҙ үҙебеҙҙән башҡа бер кемгә лә кәрәкмәй. Мәҫәлән, юлдар мәсьәләһен хәл итеүҙе һорап, Мәләүез ҡалаһы һәм районы хакимиәтенә барабыҙ, ә улар беҙгә "Һеҙ оҙаҡламай Салауат ҡалаһына ҡушыласаҡһығыҙ, улар хәл итер", тиҙәр. Салауат ҡалаһы хакимиәте иһә: "Һеҙ әлегә беҙҙең балансҡа түгел, бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ", - тип яуап бирә. Бына шулай, ике уртала тороп ҡалдыҡ тотош ауыл менән. Әлегә тиклем етәкселәргә күп төрлө һорауҙар менән мөрәжәғәт итергә тура килде. Ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, ҡағыҙ яҙыу менән генә булыштылар, ә ҡуйылған мәсьәләне аныҡ хәл итеү булманы.

(Дауамы 2-се биттә).

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЗӘЙНЕТДИНОВТАР...

## туғандары һәм халҡы менән көслө



**Өфөлә Башҡортостандың 43 районы һәм ҡалаһынан 107 социаль әүҙем ғаилә ҡатнашҡан "Өлгө ал" республика бәйгеһенең еңеүселәре билдәләнде. Баш ҡалала йәшәүсе Гөлгөнә менән Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтар ғаиләһе иңдәрҙең иңе тип табылды. Ғаиләләрҙе интернетта халыҡ үҙе лә, Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкиле Анна Кузнецова етәкселегендәге махсус комиссия ла һайланы. Ошо турала ғаилә хужабикәһе Гөлгөнә Сәрүәр ҡыҙы менән һөйләшеп алдыҡ.**

(Дауамы 16-сы биттә).

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Ошо арала ҡайһы бер зыялы милләттәштәребеҙ ауыҙынан Башҡортостан Республикаһының быуатлыҡ юбилейына арнап, бейеклеге 100 метр булған ҡурайға һәйкәл ҡуйыу тураһындағы тәҡдимдәр ишетелде.**

## ҠУРАЙҒА ҺӘЙКӘЛ ҠУЯЙЫҠ!

Эйе, башҡорт халҡы асылын мәңгеләштереүгә ошонан да ҡиммәтле һәйкәл булмаҫ ул. Билдәле, ул ҡоролма юбилей көндәрен күрә лә алмаҫ. Әммә уға нигеҙ һалынһын ине. Бейеклек ҡурҡытмай: Өфө телебашняһы - 192, Баҡалыла ул - 350, Останкинола - 537 метр. Хатта йорттар күккә аша бөгөн, Дубайҙа ул 828 метр!

Һәйкәл ҡоро көпшә генә булмаһын. Ҡурайҙағы үлсәмдәргә ярашлы, овал тиштектәр ҡалдырылып эшләнһә һәм уларҙың һәр береһенә динамиктар ҡуйылһа, электрон ҡоролмалар ярҙамында уларҙан милли гимныбыҙ "Урал"дан өҙөктәр яңғыраһа, үҙе бер мөғжизә булыр ине, тим. Әле иҫәпләп ултырам: "өҙөк" аңлашылһын өсөн бөтәһе 18-22 нота кәрәк. Бөгөн уға аптырайһы түгел: электрон сәғәттәр яңылышмай тауышлана ла һуң.

Һәйкәлдең урыны Иҫке Өфөнөң иң бейек нөктәһендә булһын. Баш ҡаланың бейек ярҙарының бер яғында Салауатыбыҙ, ә икенсе яғында Ҡурайыбыҙ торһа, был Башҡортостаныбыҙҙың, баш ҡалабыҙҙың иң үҙенсәлекле, бер ҡайҙа ла күрелмәгән-ишетелмәгән бер символы булыр ине.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ, хеҙмәт ветераны. Әбделкәрим ауылы Баймаҡ районы.**

12+

✓ *Мин, был төш түгелме икән, тип шым ғына үҙ күҙҙәремә ышанмай ултырам: бер юлы табипты ла, менеджер кимәлендәге етәксене лә, изге күңелле кешене лә тәүләп күреүем ине дауаханабыҙ стеналары эсендә.*



ӘЙТ, ТИҺЕГЕҘ...

# Етәкселәргә мөрәжәғәт итеп, ниндәй ярҙам алғанығыҙ булды? әллә ярҙам ала алманығыҙмы?

(Башы 1-се биттә).

***Тәнзилә НОҒОМАНОВА, Әбйәлил районы Дауыт ауылы:*** Ғәҙәттә, ауыл халҡы район хакимиәтенә барып, низер юллап, һорап йөрөй һалмай бит ул, бик килеп ҡыҫмаһа инде, сөнки үтенес-ғаризаңдың волокитаһыҙ, ыңғай ғына хәл ителеренә өмөт тә юҡ ине бит. Был бөтә ерҙә лә шулай булғандыр, тип уйлайым. Хәҙер, республикабыҙға яңы етәксе тәғәйенләп ҡуйылғас, ул чиновниктар алдына бик ғәҙел талаптар ҡуя башлағас, хәл бер аҙ ыңғайға үҙгәрер, бәлки, тигән өмөт уяндыҙ халыҡта. Ысынлап та, ниндәй кимәлдә булһа ла, ул етәксе йә яуаплы хеҙмәткәр булып эшләй икән, үҙен "мин - мин, һин - кем" тигәндәй һауалы, юғарынан ҡарап ултырырға тейеш түгел. Бик дөрөҫ әйтте бит уларға Радий Фәрит улы Хәбиров: һеҙ халыҡҡа хеҙмәт итеүселәр, тип. Юғиһә, район хакимиәтенә инергә лә ҡыймай тора ине бит ябай кеше, бигерәк халыҡ мәнфәғәтенән алыҫлаштылар, ҙҙәрен хакимиәт хеҙмәткәрҙәре итеп түгел, ә элита, түрә итеп тоя башлағайнылар. Ярай, быныһы һүҙ ыңғайы булды. Үҙемә килгәндә, район үҙәгенә барып, ниндәйҙер ярҙам һорап йөрөгәнем юҡ ине, шулай ҙа бынан бер нисә йыл элек башҡа төштө мохтажлыҡ. Дөрөҫөрәге, үҙем өсөн дә түгел. Әбйәлилдә ҡайһы бер ауылдарҙы һыу баҫыу стихияһы мәлендә улыбыҙ ғаиләһенең йортон да эштән сығарып китте был ҡаза. Йорт-ҡура, мебель, кейем-һалым, сәскән картуф ҡыналары - бөтәһе һыу аҫтында ҡалды. Улыма ваҡытлыса икенсе йортҡа күсеп сығырға тура килде. Шул ваҡыт мохтажлыҡ кисереүҙән район хакимиәте башлығына мөрәжәғәт итергә тура килгәйне. Ул саҡ беҙҙең "хаким" Рим Сынғыҙов ине. Минең үтенесте ҡәнәғәтләндереүҙән баш тарттылар: улыдың йорто һыу баҫыу зонаһына ҡарамай, йәнәһе... Ә стихия һинең теге йә был зона сиктәренә ҡарап торамы ни һуң? Күрәләтә һыу баҫыу ҡазаһына тарып, зыян күргән ғаиләшулай итеп ярҙамһыҙ тороп ҡалды. Йәғни түрәләр "түрәләрсә", кеше бәләһенә юғарынан ҡарап фекер итте. Шунан һуң мин ниндәйҙер етәксегә барып, баш эйеп, мескенләнеп тороуҙан өҫтөн булырға тырышам, Хоҙай Үҙе генә ташламаһын ярҙамынан, тиеп теләйем.

***Фәтих МИРҒӘЛИЕВ, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Эйе, килтереп ҡыҫһа, бармаҫ ерҙән бара инек шул түрәләргә. Минә үҙебеҙҙең 43-сө поликлиника түпһаһын ғына түгел, уның "хужа"һының ишек төбөндә лә йыш тапанырға тура килде бер осор. Сир һорап килмәй, ә дауаханаларҙа үҙегеҙ беләһегеҙ нисек ярҙам күрһәткәндәрен. Шуға ла йыш ҡына поликлиника мөдире, йәғни "начмед" кабинетына тиклем барып етергә тура килә ине гәҙеллек юллап. Ярай ҙа ҡабул итеү бүлмәһендәге секретарь ҡыҙыҡай үткәреп ебәрһә. Үткәрмәһә инде, кәрәк булғас, ҡайһы саҡ "үҙешмәкәрлек" күрһәтергә лә тура килгеләй ине. Шундай аңлашылмаусылыҡтарҙан ҡурсып, ҡатыным минә матур ғына пакетҡа бер ҡап кәнфит һалып ебәрә ине: ҡүстәнәс, йәнәһе. Күп ташырға тура килде инде былай табиптарға кәнфитен дә, башҡаһын да. Ошоға тиклем берәүҙән дә баш тартҡаны булманы. Тик бына һаулыҡ ягы ғына бер ҙә алға барманы. Поликлиникала булмаған белгестәргә икенсе дауаханаларға ла йыш йөрөргә тура килде, ләкин унда түләүһеҙ инәм тиһәң, ҡүстәнәстән тыш йүнләтмә лә тотоп барырға кәрәк. Ана шул нәмәҫтәкәйҙе бирмәй йонсота инеләр, бирһәләр ҙә, берәр айлап көтөргә тура килә торғайны. Был юлы тиҙ кәрәк булды ул ҡағыҙ киҫәге. Уролог уны бирмәгәс, киттем начмедҡа. Барып инһәм, элекке көйәҙ ханым урынында ҡүҙлекле, йәш кенә егет, урынынан ҡалҡынып, мине өҫтәле янына саҡырҙы, ултырырға ымланы. Йомошомдо әйткәс тә, үрелеп, бер ҡағыҙ алды ла яҙа ла башланы. Ҡараһам, был рәхмәт яуғыры минә йүнәлтмәне үҙе тултырып ултыра! Бынын менән генә эше бөтмәне әле, телефонға тотондо: 20 йыл эшләп, ауырыуҙы нефрологҡа ебәреү өсөн ниндәй анализдар кәрәклеген дә белмәйһегеҙме ни, тип тетмәһен тетте тегенен. Шулай итеп, минең мәсьәләнән башҡа йомош менән кабинетҡа инеп-сығып йөрөгән кешеләр менән дә һөйләшеп, телефон шылтырауына ла (секретарь тигән вазифа юҡ ине инде) яуап биреп, бер юлы әллә күпме файҙалы эш башҡарып өлгөрҙө яңы хужабыҙ. Мин, был төш түгелме икән, тип шым ғына үҙ күҙҙәремә ышанмай ултырам: бер юлы табипты ла, менеджер кимәлендәге етәксене лә, изге күңелле кешене лә тәүләп күреүем ине дауаханабыҙ стеналары эсендә. Ҡайҙа, нисек, ҡасан, ниндәй ҡағыҙҙар менән кәрәкле белгескә барыу юлдарын аңлатып, хушлашты ла, башҡа эштәренә тотоноп китте ул. Ахырҙа рәхмәттәремде укып бөтә алмай, ундай кимәлдәге кешегә кәнфитемде бирергә лә оялып, сығып киттем. Үкенескә, элекке "тәртип" тамырҙары тәрәнерәк булған, күрәһең, яңы етәкселек ысулдарына оҙаҡ сыҙамағандар бында. Юғарынан күрһәтмә буйынса, эшлекле был начмед егет "нишләптер үҙ теләге менән эштән китте," тине урынына кире килеп ултырған секретарь ҡыҙ, ҡәнәғәт төҫ менән...

***Хәдис САФИУЛЛИН, Учалы районы Колош ауылы:*** Ғүмерем буйы тыуған ауылымда йәшәйем, ваҡытында комбайнер булып та, малсылыҡта ла эшләнем, әле пенсияламын. 8-се кластан һуң уҡырға тура килмәһә лә, тыуған төйәгем тарихы, юлымда әленән-әле осрап торған боронғо әйберҙәр менән ҡыҙыҡһыныуым көслө булды. Шулай бер ваҡыт ауыл зыяратындағы ҡәбер ташы иғтибарымды йәлеп итте. Ундағы руна билдәләрен уҡып, белгестәр был таштың 793 йылда һалынғанлығын раҫланы. Ауыл эргәһендә шундай таштарҙан төҙөлгән пирамидалар ҙа бар. Тимәк, беҙҙең Ҡолош ауылына нигеҙ һалыныуға 1221 йылдан артыҡ! Һөҙөмтәлә, 2013 йылда үҙемдең йорт-хужалығым биләмәһендәге бәләкәй өйҙә ҡатыным Фәүзиә Муса ҡыҙы менән музей асып ебәрҙек. Береһенән береһе ҡыҙыҡлыраҡ һәм ҡиммәтерәк экспонаттарҙы бөтөн ауыл менән туплай барабыҙ, хатта ситтән дә ебәрәләр. Таштан эшләнгән боронғо быҫаҡты Илтабан һыу һаҡлағысы төбөнән табып килтерҙеләр. Йөҙөнә иероглифтар төшөрөлгән ҡытай балтаһы, һинд вазаһы, үҙебеҙҙең тукыу станогы, ҡул тирмәне, Ҡөрьән китаптары, Зәйнулла ишандың таяғы... Нимәләр генә юҡ бында! Теманан ситләштем - ғәфү итегеҙ. Ләкин был мәсьәләнең мөһимлеген аңлатыу өсөн кәрәк, тип уйлайым.

Быйыл музейыбыҙҙың бәләкәй генә булһа ла юбилейын билдәләп, бер ниндәй түләү һорамай, боронғо әйберҙәрен музейға бүләк иткән ауылдаштарҙы, бигерәк тә оло йәштәге инәйҙәребеҙҙе ризаҡлап, уларға бүләктәр алып, күңелдәрен күрергә ниәтләнек. Шул саҡ район хакимиәтенә бер аҙ аҡса бүлеүҙәрен һорап, мөрәжәғәт итергә тура килгәйне. Район башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Гордиенко Зөһрә Мәүлетбей ҡыҙы музейыбыҙҙы үҙе килеп ҡарап киткәндән һуң, ауыл клубы исеменә 30 мең аҡса бүленде, тинеләр. Зөһрә Мәүлетбай ҡыҙына рәхмәтлебеҙ, әлбиттә, мәсьәләне оператив хәл итте. Ләкин клуб хеҙмәткәре беҙгә ул аҡсанан ни бары 2 мең генә арттырҙы. Был, әлбиттә, сара үткәреү өсөн етмәй ине, шуға, аҙаҡ барып һөйләшкәс, тағы 4 мең өҫтәне. Ә бит беҙҙең сара үткәреүҙән тыш та сығымдар булып тора: музей урынлашҡан өйҙә йыйыштырып, матурлап, туҙа башлаған урындарын һипләп торорға ла тура килә: ситтән ишетеп тә музей ҡарарға кеше күп килә бит, уларҙы тыуған өйҙә ҡаршылауы оят булмаһын, тибеҙ. Бер заман музейға ремонт та вәғәҙә иткәйнеләр ҙә ул, һуҙ генә булып ҡалды, ярай инде уныһы түҙерлек, етешә алмайҙарҙыр. Тик бына ошо аҡса мәсьәләһендә аңлашылмаусылыҡ килеп сыҡты инде - ни эшләйһең. Бер яҡтан, үҙебеҙҙең шәхси башланғыс булғас, үҙҙәре теләһә ни эшләһендәр, тип ҡарайҙарҙыр, бәлки, ләкин уникаль экспонаттарға бай был музей беҙгә генә кәрәкме ни? Тыуған яғыбыҙ тарихын ҡәҙерләргә, өйрәнергә, ҡыҙыҡһынған кешеләргә, бигерәк тә йәш быуын - балаларға ана шул ҡомартҡылар аша атабабаларыбыҙ тарихын күрһәтеү, һөйләү, аңлатыу - ул бөтәбеҙҙең дә уртаҡ, дөйөм эшебеҙ һәм изге бурысыбыҙ тип аңлайым мин. Шәхси башланғыстарҙы күтәрмәләп алыу, яҡлау, һәр яҡлап ярҙам итергә әҙер тороуҙа ла күренә бит ул урындағы етәкселектең эш стиле. Шуныһы ла мәғлүм булһын: ҡатыным менән был музейҙы бик тә яратып, риза булып тотабыҙ һәм ошоға тиклем бер ваҡытта ла, бер кемгә лә ярҙам һорап йөрөгәнебеҙ юҡ ине - даулашып, һоранып йөрөргә яратмайбыҙ ҙа. Музейға тип тәғәйенләнгән аҡса шәхсән беҙҙең үҙ мохтажлығыбыҙ өсөн кәрәк түгел ине бит...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ТУҠТА, МӘЛ!



Беҙ барыбыҙ ҙа "Киске Өфө"гә яҙылдыҡ, ти Өфө районы Шамонино ауылы ағинәйҙәре.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров эш сәфәре менән Октябрьскийҙа булды. Ул 90-сы йылдар башында балалар баҡсаһы урынлашҡан, хәҙер инде буш торған бинаны ҡарағандан һуң, быңдай биналарҙы муниципалитеттар ҡарамағына тапшырыу, капиталь ремонт яһау һәм уларҙа мәктәпкәсә мәғариф учреждениелары асыу кәрәклеген билдәләне. Был бюджет аҡсаһын экономияларға һәм балалар баҡсаларына сиратты бөтөрөү мәсьәләнән тиҙерәк хәл итергә мөмкинлек бирергә тейеш.

✓ Илвир Нурдәүләтов Өфөнөң Совет районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде, бынан алда ул ошо уҡ район башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһын биләне. Илвир Нурдәүләтов был вазифала ноябрь башында Башҡортостан Башлығының иҗтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы етәксеһе итеп тәғәйенләнгән Урал Килсенбаевты алмаштырҙы.

✓ Башҡортостандың TERRA BASHKIRIA туристик бренды төбәк туристик брендтарының милли рейтингында беренсе урынды алды. "Курсаулыҡтар һәм парктар" номинацияһында "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы өсөнсө урынға сыҡты. Бөрйәндең солоҡ балы "Рус тәм-томдары" номинацияһында иң яҡшы өсәү иҫәбенә инде. Милли рейтингҡа ингән брендтар һаны буйынса Башҡортостан (3 бренд) Белгород, Вологда, Воронеж, Ростов, Тверь, Ярославль өлкәләре һәм Мордовия менән 4-се урынды бүлешә.

✓ Башҡортостанда "Йәшлек-шоу" республика фестивале йәш йырсыларҙы саҡыра. Ғаризалар ҡабул итеү башланды. Гала-концерт 8 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефон: 8-927-333-17-17.

✓ Рәсәй ҡалалары араһында Өфө таҙалыҡ рейтингында 52-се (миллионлы ҡалалар араһында - бишенсе) урынды биләй. Тикшереүҙе Domofond.ru күсемһеҙ милек порталы белгестәре үткәргән һәм Башҡортостанда йәшәүселәрҙең ҡаланың таҙалығын 6,2 балға баһалауын асыҡлаған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Өфөлә таҙалыҡ менән шөғөлләнергә кәрәк" тип билдәләгәйне.

УЙЛЫҒА - УЙ

**Был һорауҙы үҙемә лә, яҡындарыма ла бик йыш бирәм. Тәү ҡарашҡа ғына ябай тойолған был һорауыма ҡайһы берәүҙәр көсәнеп уйланмай, енел генә "Эйе" тип яуап бирел, үҙ фекерен замананың алдынғы технологиялары шарттарында йәшәү менән бәйләй. "Заманаһы шундай бит, ни хәл итәһең инде?" тип зарланғандарға һорауымды үҙгәртәм: "Заманны төҙәтергәме, әллә уның көтөлмәгән сюрприздарына үҙебеҙ сәбәпсеме?" Миҫал өсөн бынан утыҙ-ҡырҡ йылдар элек оло гонаһтарҙан һаналған ҡылыҡтарҙан бер нисәһен һанайым: "СПИД, ВИЧ исемен алған йоғошло ауырыуҙар, "граждандыҡ никахы", наркоманлыҡ, эскелек, сүп- сарҙарҙа табылған сабыйҙар, һәр төрлө телеканалдарҙа күрһәтелгән хәшәрәттәр, интернет селтәренә мөкиббән бирелеүҙәр һәм башҡалар - быларҙың барыһына ла кеше үҙе гәйепле түгелме ни? Әллә был әшәкеләргә лә замана гәйеплеме?" тигән һорауҙан һуң, ҡыҙыу бәхәскә әүерелеп барған әңгәмә ирекһеҙҙән һүрелә төшөп, һәр кем үҙ эсенә йомола...**

# ЗАМАНА БЕҘГӘ БӘЙЛЕМЕ,

## әллә беҙ - заманағамы?



Үкенескә ҡаршы, һуңғы йылдарҙа Ер йөҙөндә йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙың хаяһыҙ ғәмәлдәрен заманаға бәйләп, үҙ-үҙҙәрен аҡларға маташыуҙар, "заман менән бергә атларға" маташыусылар, шуның менән "алдынғы ҡарашлы" булырға тырышыусылар һаны арта ғына бара шикелле. Быны ҡайһы бер күҙәтеүҙәрем менән раҫламаҡсы иҫәбем.

Күптән түгел арыу уҡ күрешмәгән танышым менән телефон аша һөйләшеп киттек. Хәл-әхүәл һорашҡас: "Бабайым менән бергәләшеп мәсеткә йөрөп, намаҙ уҡырға өйрәнеп алдыҡ. Хәҙер икәүләшеп намаҙ уҡыйбыҙ, мәсеткә йөрөйбеҙ", - тине танышым. Намаҙға баҫмаһалар ҙа, динде ихтирам иткән кешеләр менән һөйләшкәндә һәр ваҡыт шатлыҡ тойғолары менән бергә әңгәмәсемә ҡарата ихтирам тойғоһо уяна ине. Был юлы шатланып өлгөрә лә алмай ҡалдым... "Хәҙер намаҙ уҡыу модала бит", - тип һалдырҙы "модный" танышым. "Хәҙер модала" тигәне юғарыла ҡуйылған һорауыма тулыһынса яуап булды ла ҡуйҙы, йәнәһе, заманаһы шул: моданан ҡалышып, намаҙ уҡымай йөрөп булмаҫ инде, оят бит. Тимәк, модный танышым аңлауынса, кемдер үҙ сабыйын үҙе үлтерһә, был - замана модаһы, телевизорҙан ярым шәрә көйө сығыш яһаһалар - был да мода, гәзиз атаәсәңдең йорт ҡураһына талашып, судлашып йөрөһәң, был да замана "модаһынан артта ҡалмау", ҡайсаҡ яулыҡты ла тик күптәр ябынған өсөн, йәғни, мода өсөн ябынабыҙ кеүек.

Яулыҡты ла мода өсөн генә ябынғандар тураһында ла юҡҡа ғына һүҙ ҡуҙғатманым. Бер ваҡыт ишек алдында торһам, тамаҡ төбө менән шарылдап, бер йәш әсә балаһын әрләй. Бәләкәс кенә балаһы яткан коляскаһы бер ҡулы менән этеп, эргәһендә йүгерә-атлай мыжып килгән малайын икенсе ҡулы менән этәләп-төртөләп, донъя яңғыратып әрләйәрләй килгән йәш ҡатындың кейеменә иғтибар иттем. Оҙон күлдәкле, башында яулығы ла бар - кейеменә ҡарап, һоклаһып торорлоҡ. Тик... күп тә үтмәне, йәш әсәнең тауышына балаһының илау тауышы ҡушылғанға әйләнеп ҡараһам, әсә кеше подъезд алдында ҡысҡырып әрләй-әрләй, малайын дөмбәҫләй башланы. Күңелемә икейөҙләләк тураһындағы ауыр уйҙар ятты. Кеше күҙенә күренеп торған кәүҙәндә ҡаплау әле иманлы булыуҙың бер өлөшө генә, тәү ҡарауҙан күренеп бармаған "эске кәүҙәндә" лә иман кейеменә кейендереүҙәлер Аллаһы Тәғәлә ҡушҡандарҙы үтәү һәм Уның тыйғандарынан тыйылыу, тигән фекергә туҡталдым мин ошо минутта.

Күҙәтеүҙәрем нигеҙендә яҙылған ике осраҡта ла иманды мода менән бутап, моданан ҡалышмай йәшәп ҡалырға тырышыу шауҡымы ярылып ята. Тәүгеһендә намаҙ уҡыу - мода, тип асыҡтан-асыҡ әйтелһә, икенсеһендә, иманлы булыу өсөн Ул ҡушҡанса кейенеү ҙа еткән, тип аңлау. Әлбиттә, беҙ, әҙәм балалары, бөтәбеҙ ҙә гонаһлыбыҙ. Ҡайһы ваҡыт кемгәлер эйәреп, йә кемдер ҡушты тип гәмәл ҡылабыҙ, ҡылғандарыбыҙҙың дөрөҫ булмауы асыҡланһа, эйәрткән кешене гәйепләп, бөтә гәйепте уға ауҙарып, үҙебеҙҙе аҡларға маташабыҙ.

Ер йөҙөндәге фәхеш һәм харам эштәр арҡаһында Ер һәм диңгеҙҙәр өҫтө боҙолоуына, йоғошло, ҡаты сирҙәргә, ҡаты аслыҡҡа дусар булыуға тик үҙебеҙ гәйепле икәнде аңлау өсөн беҙгә, әҙәм балаларына, Уның тарафынан күпме ваҡыт бүленде икән, йәмәғәт? Һынау өсөн килгән фани донъяны ғына яратып, бары тик тәнебеҙ һорағанды ғына көнәгәтләндерел, йәнебеҙҙе утҡа һалмайбыҙмы? Мәрйәм апай Бураҡаеваның "Һәр башҡорт өйөндә ҡурай булырға тейеш" тигәненә ҡушып, мин "Ҡурай янында Ҡөрьән булыуы фарыз" тип өҫтәр инем. Ҡөрьәнде уҡып, өйрәнеп йәшәгән кеше һирәгерәк яңылыша. Әммә Изге Китапта, бөтә кеше лә Ҡөрьән менән вәғәзләнмәҫ, тип тә әйтелгән бит әле. Тимәк, беҙ, әҙәм балалары, балаларыбыҙҙы ғына түгел, хатта үҙебеҙҙе лә иман юлында тәрбиәләүгә үтә лә һуң тотонабыҙ, тигән һығымта яһарға урын бар. Имандыҙ ҡеүәтләү кемдәргәлер бик еңелдән дә түгелдер, шуға күрә Ҡөрьәндә бирелгән аяттар нигеҙендә икеләнеү-шикләнеүҙәрһеҙ (мода тип кенә ҡабул итмәһендәр өсөн) аңлатып бирерлек дин әһелдәренең маҡсатлы эшләүе лә мотлаҡ, тип иҫәпләйем үҙем. Мөмкинлектән файҙаланып, был мәҡәләмдә иман юлын һайлауға битараф булмаған милләттәштәремә үҙем шаһит булған бер ваҡиғаны ла миҫалға килтермәксемен.

Урал ярьяғында урынлашҡан Хәйбулла районын йәй үҙенең ямғырҙары менән бигүк иркәләп бармай. Ауылда фермер булып көн күргән бер туған Вәкил ҡустым 2010 йылда ла иген сәсте. Әммә ямғыр булмау сәбәпле, игене насар ғына сығып, үҫә алмай аҙаплана ине. Барыбыҙ ҙа үҙебеҙгә ауыр саҡта ғына Аллаһы Тәғәләне иҫкә төшөргән кеүек, Вәкил ҡустымдың да Ул ҡушҡандарҙы үтәү фарыҙлығы уйына килә. Иген баҫыуында ҡорбан салдырып, туғандарҙы, яҡындарҙы ҡорбан ите менән һыйлап, намаҙ уҡып, изге теләктәр теләгәндән һуң өйҙәребеҙгә таралыштыҡ. Иртәгәһе көндө түҙемһеҙлек менән көтөп алған Вәкил ҡустым үҙ баҫыуы яғына ҡараһа, унда ҡап-ҡара болот киҫәге күрә. Ярҙамсыһы Хәлимгә әйтеп, икәүләшеп баҫыуға юллана улар. "Бынауындай әсәлә ниндәй ямғыр һиңә, Вәкил ағай", тип көлгән Хәлим, Вәкил ағаһының ғына баҫыуы өҫтөнә яуып үткән ямғырҙы күреп, һүҙһеҙ ҡала. Ҡорбан ваҡытында күрше фермерҙың: "Вәкил ағайҙың ҡорбаны минең баҫыуға ла етә ул", - тигәне Юғары Көстөң иғтибарынан ситтә ҡала. Аллаһы Тәғәлә был юлы ла һәр кем үҙе өсөн генә яуаплы икәнен тағы бер тапҡыр иҫкәрткәндәй, ямғырын тик ҡорбан салдырыусының баҫыуы өҫтөнә һибеп, Үҙенең Барлығын һәм Берлеген белдереп, Үҙе ҡушҡандарҙы үтәү фарыҙлығын иҫкәртә...

"Киске Өфө" гәзитен мин балалар тәрбиәләүҙә ярҙамсы методик ҡулланма кеүек күрәм. Ниндәй генә битен асһаң да, үҙ балаң менән булһынмы, уҡыусыларың менән булһынмы, тәрбиә мәсьәләләренә яраҡлы мәҡәлә табып уҡып, рәхәтләнеп кәңәшләшергә, йә булмаһа, бәхәс ҡororға мөмкинлек биреүсе әсбап кеүек тойола ул миңә. Был һығымтаға килеүемдең сәбәбе лә үҙемдең һөнәрем уҡытыусы булғанлыҡтандыр, моғайын. Әммә баланы уҡытыусы ғына тәрбиәләмәй, тәрбиәнең нигеҙе ғаиләлә һалынғанлыҡтан, балаларыбыҙҙы тәрбиәләүҙән алда үҙебеҙ тәрбиәле булайыҡ, тип өндәшке киләм милләттәштәргә. Бәйгәмбәребеҙҙең: "Йәштәрҙең ололар булып ҡыланыуы - яҡшы, ә ололарҙың йәштәр булып ҡыланыуы - шаҡшы", - тиеүе лә юҡҡа түгел бит. Был һүҙҙәрҙе Аллаһ илсеһе киләсәктә намаҙҙы мода тип, әҙәпһеҙ хәбәрҙәрҙе мәрәкә хәл итеп ҡабул итеүселәр булыу ихтималлығын тойоп әйтмәнеме икән, тигән уйҙа туҡталам ҡайсаҡ. Иман - ул мода түгел, иман - ул йән тыныслығын көҫәгән күңел торошо, үҙеңдең генә түгел, вариҫтарыңдың, нәҫеләндең дә әхлаҡлы булып йәшәү рәүеше. Ошондай һығымталарымдан сығып, милләттәштәребеҙҙе борсоған мәсьәләләр: халҡыбыҙҙың кәмей барыу сәбәптәре, телде һаҡлау проблемалары, яңғыҙлыҡ бәләләре - барыһын да ыңғай хәл итерлек юлдар күрһәтелгән Изге Китабыбыҙға иғтибарлы һәм ихтирамлы булайыҡ, милләттәштәр, тип әйтке киләм.

**Нәзиә БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Тамыр" балалар-үсмерҙәр телеканалы IV "Федерация" Бөтә Рәсәй телевизион конкурсы еңеүсеһе булды. Балалар телеканалының "Этноlike" проекты "Ата-бабалар теле" номинацияһында иң яҡшыһы тип танылды.Конкурста Рәсәйҙең бер нисә тиҫтә төбәгенән 200-ҙән ашыу эш ҡатнашты. Бүләкләү тантанаһы 20 ноябрҙә Мәскәүҙә уҙҙы.

✓Күп фатирлы йорттарҙа дөйөм милекте капиталь ремонтлауҙың 30 йыллыҡ программаһына республиканың 16965, шул иҫәптән Өфөнөң 4984 йорто индерелгән. Программаны дүрт йыл тормошҡа ашырыу барышында 3953, шул иҫәптән баш ҡалала 1373 йорт ремонтланған. Быйыл Өфөлә 548 йорт ремонтланырға тейеш. Капиталь ремонтҡа түләүҙәргә килгәндә, туғыҙ айҙа халыҡтан 95,9 процент аҡса йыйылған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 6,4 процентҡа күберәк.

✓Быйыл тәүге 10 айҙа Башҡортостанда дөйөм майҙаны 1,618 миллион квадрат метрлыҡ 20 мең фатир сафҡа индерелгән. Был уҙған йылдың ғинуар-октябренә ҡарағанда 10,5 процентҡа кәмерәк, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Торлаҡ төҙәлөшө структураһында халыҡтың үҙ иҫәбенә һәм кредит ярҙамында төҙөгән торлаҡ өлөшө 71 процент тәшкил иткән. Башҡортостанда йәшәүселәр дөйөм майҙаны 1,149 миллион квадрат метрҙан ашыу 10,6 мең өй һалған.

✓Рәсәй Хөкүмәте ил иҡтисадын долларҙан баш тарттырыу буйынса проект әҙерләй. Бер-ике аҙнанан планды ил Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев раҫларға тейеш. Хөкүмәт әҙерләгән проектта ниндәйҙер сикләү йәки тыйыу саралары тураһында һүҙ бармай, йәғни долларҙа иҫәпләшеүгә тыйыу булмай. Хөкүмәт күҙ уңында тотҡан төп маҡсат - Рәсәйҙең ҙур сауҙа партнерҙары менән иҫәпте - Ҡытай һәм Европа илдәре менән - юанға һәм евроға, Евразия иҡтисади союзы илдәре менән - һумға күсереү.

✓Хеҙмәт министрлығы "инвалидтар" һүҙен ҡулланыуҙан баш тартырға һәм уны нейтраль термин менән алмаштырырға тәҡдим итә. Чиновниктар "инвалидтар" термины иҫкергән тип иҫәпләй һәм уның урынына "махсус ихтыяжлы кешеләр" һүҙбәйләнешен ҡулланырға кәрәк тигән тәҡдим индерә. Ведомство ошондай тәҡдим менән Федераль медик-социаль экспертизаһына мөрәжәғәт итергә ниәтләй. Шулай уҡ мәсьәләне инвалидтарҙың йәмәғәт ойошмалары менән тикшереү ҡаралған.

***✓ Юл аҙабы арҡаһында тәүге дәрескә һуңлау, иртән ашамай сығып китнәнлектән, уҡыу тураһында түгел, тамаҡ ҡына уйлап ултырыу яҡшы һөҙөмтәләр бирмәйәсәк. Беҙгә матур юлдар, мәктәптәр кәрәк!***



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Үҙ тормошонда ғына түгел, бөтә йәмғиәттә ниндәйҙер хәл-вағиғаны күҙ уңынан ысҡындыраһың, иғтибарыңды саҡ ҡына ситкә йүнәлтәһең икән, нәҡ шул өлкәлә артта ҡалып, етешһеҙлектәр килеп сыға, хәл итәһе мәсьәләләр күбәйә. Шул арҡала яңы башланғыстар ярты юлда туҡтап ҡала, көткән өмөттәр аҡланмай, күңелгә ғәмһеҙлек, битарафлыҡ оялай. Республикабыҙға яңы Башлыҡ килеүе барыбыҙҙы ла ойоған ерҙән ҡапыл ғына уятып ебәргәндәй булды. Күңелдә ышаныс артып, өмөттәр моронланы. Күбебеҙ тормошто, дөйөм проблемаларҙы тағы бер тапҡыр күҙ уңынан үткәрә башланыҡ. Яңы Башлыҡҡа минең дә әйтер һүҙем бар.**

# ЕМЕРГӘНДЕ...

## ҡабат тергеҙергә кәрәк

- Радий Фәрит улы тәү сиратта ер мәсьәләһен тәртипкә килтерһен ине. Бөгөн бүлеп бирелгән пай ерҙәрен бик әҙҙәр генә эшкәртеп, маҡсатҡа ярашлы файҙалана. Элек шаулап үҫкән иген баҫыуҙарын сүп, күбеһен ағас баҫып бара. Ә бит ҡасандыр ҙур аҡса түгеп, был ерҙәрҙең урманын ҡырҡып, төпләп, баҫыуяландар эшләнде. Бөгөн иһә, ҡайһы бер фермерҙар йәки техникаһы булған айырым кешеләр генә бушлай бирелгән ошо ерҙәрҙе кәртәләп, иген үҫтерә, сабынлыҡ итеп файҙалана. - Ауылды һаҡлау, үҫтереү мәсьәләһе лә көнүҙәк, сөнки милләтәштәребеҙҙең күбеһе нәҡ ауылдарҙа көн күрә. Уларға лайыҡлы тормош булдырыу өсөн иң беренсе йәштәрҙе ауылда ҡалдырыу мөһим. Бының өсөн үҙ эшен булдырыусыларға ярҙамды көсәйтергә, уларға ташламалы ссуда, һалым булдырырға ине. Шәхси эшҡыуар, фермерҙарҙан тыш, дәүләткә бүйһонған элекке колхоз кеүек хужалыҡтар ойоштороп, игенселек, малсылыҡ менән шөғөлләнергә, емеш-йәшелсә үҫтерергә кәрәк. Шунлыҡтан кооперативтар үҫеше лә хуплауға ғына лайыҡ. Ауыл ерендә завод-фабрикалар төҙөп булмай, унда элек-электән ер эше төп шөғөл булған. Быны хәҙер ҙә тергеҙергә, үҫтерергә кәрәк, сөнки колхоз-совхоздар булған осорҙа эшһеҙлек проблемаһы бөтөнләй ҙә булманы! Ғөмүмән, ауыл ерендә яңы алымдар уйлап тораһы түгел, ә 20-30 йыл элек булған бөтә нәмәне ҡабаттан тергеҙеү генә шарт. Ауылды һаҡлау, үҫтереү, йәштәрҙе эш менән тәьмин итеү ҙә әлеге лә баяғы шул буш ятҡан ерҙәргә барып тоташа.

- Бөгөн күпме мәктәп, дауахана, дарыуахана, китапханалар ябылған, мәҙәниәт йорттарының да барыһы ла тулы ҡеүәтенә эшләмәй. Уларҙы кире тергеҙгәндә генә лә әллә күпме эш урыны булыр ине. Модаға инеп киткән аутсорсинг компаниялары арҡаһында ғына ла күпме кеше эшһеҙ ҡалды. Ошо компанияла эшләгәндәрҙең ҡайһы берәүҙәре хатта эш хаҡын да ала алмай яфалана. Ҡулайлаштырыу арҡаһындағы ҡыҫҡартыуҙар әллә күпме проблема тыуҙырҙы. Был проблема кәмемәне, көсәйҙе генә.

- Балаларҙың икенсе мәктәпкә йөрөп уҡыуы ла ауылдарҙың ғына түгел, бөтә мәғариф өлкәһенең төп проблемаһы. Быға юл мәсьәләһе лә өҫтәлә, сөнки уҡыусыларҙың хәүефһеҙлеге, уларҙы ташыу өсөн иң беренсе яҡшы юл кәрәк. Югиһә, бөгөн трактор ҙа үтә алмаған төпкөл ауылдарҙағы балаларҙың яҙғы-көҙгө бысраҡта, ҡышҡы буранда ла белем алыу өсөн таңғы алтынан тороп юлға сығыуы әсендерә. Юл аҙабы арҡаһында тәүге дәрескә һуңлау, иртән ашамай сығып китнәнлектән, уҡыу тураһында түгел, тамаҡ ҡына уйлап ултырыу яҡшы һөҙөмтәләр бирмәйәсәк. Беҙгә матур юлдар, мәктәптәр кәрәк! Шунда ғына ауылдар ҙа үҫер, эш тә булыр, ерҙәребеҙ ҙә буш ятмаҫ.

**Мәүлит КӘРИМОВ,**
**шағир, "Ҡуңыр буға"**
**төбәк-йәмәғәт ойошмаһы идараһы рәйесе.**
**Белорет районы Сосновка ауылы.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺАУЛЫҠ ҺАҠЛАУ СӘҒӘТЕ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләрен оператив хәл итеү өсөн аҙналыҡ кәңәшмәләрҙең яңы форматын - "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"н индерҙе.**

Муниципалитет башлыҡтары һәм медицина учреждениелары етәкселәре ҡатнашлығындағы шундай тәүге "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"н Радий Хәбиров видеоконференция режимында үткәрҙе. Тәү сиратта төбәк етәксеһе йыйылыусыларға фельдшер-акушерлыҡ пункттары, уларҙың матди-техник торошо һәм кадрҙар менән тәьмин ителеше проблемаларын тикшерергә тәҡдим итте. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Рафаэль Яппаров һөйләүенсә, бөгөн Башҡортостан үҙенең илдә иң ҙуры булған һәм йылдан-йыл үҫешкән фельдшер-акушерлыҡ пункттары селтәре менән ғорурлана ала. Быйыл ғына төбәктә 24 яңы фельдшер-акушерлыҡ пункты эшләй башланы. Ләкин әле фельдшер-акушерлыҡ пункттарының өстән бер өлөшө тиерлек капиталь төҙәкләндереүгә мохтаж, ә 31-е бөтөнләй авария хәлендә. Тағы 105 беренсе звено медицина учреждениеһы белгестәр етешмәүгә бәйле буш торорға мәжбүр. Буш фельдшер-акушерлыҡ пункттарының күбеһе Ҡырмыҫҡалы (9), Баймаҡ (8), Хәйбулла (7) һәм Балтас (7) райондарында урынлашҡан. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы етәксеһенең ентекле сығышын тыңлағас, Радий Хәбиров һәр муниципалитетта проблемаларҙы хәл итеү ваҡыты буйынса аныҡ датаны билдәләргә, шулай уҡ район башлыҡтарына ваҡыт табып, фельдшер-акушерлыҡ пункттарын йөрөп сығырға, халыҡ менән аралашырға, уларҙы борсоған проблемаларға төшөнөргә ҡушты.

# ЯҠШЫ ЛА, ТУРА ЛА ЮЛДАР

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров етәкселегендәге делегация Мәскәүҙә XII "Рәсәй транспорты" халыҡ-ара форумында ҡатнашты.**

Форум барышында Радий Хәбиров менән Федераль юл агентлығы (Росавтодор) етәксеһе Андрей Костюктың эш осрашыуы булды. Яҡтар федераль үҙәктән финанс ресурстары ярҙамында Башҡортостандың транспорт системаһын үҫтереүҙең төп йүнәлештәрен тикшерҙе. Һүҙ Өфөнән Көнсығыш юлын төҙөү һәм Р-240 "Өфө - Ырымбур" автомобиль юлын төҙәкләндереү буйынса концессия проектын тормошҡа ашырыу мөмкинлектәре хаҡында барҙы. Ағиҙел йылғаһы аша күперҙән М-5 "Урал" сиселешенә тиклем "Өфө - Аэропорт" трассаһының бер өлөшөн федераль милеккә тапшырырға тәҡдим ителде. Росавтодор етәксеһе әлеге башланғыстарҙы ыңғай баһаланы һәм төбәктең позицияһын хупланы. Шулай уҡ Радий Хәбиров Андрей Костюкка Өфөлә Воровский һәм Интернациональ урамдары участкаһында -Ағиҙел йылғаһы аша ике күпер һалыуға федераль субсидиялар йәлеп итеү өсөн ғаризаларҙы ҡарарға тәҡдим итте.

Өфө "Мәскәү-Екатеринбург" юғары тиҙлекле магистрален төҙөү проектына инергә тейеш. Тап ошо хаҡта һүҙ барҙы 21 ноябрҙә Радий Хәбировтың "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәте идараһы рәйесе - генераль директоры Олег Белозёров менән эш осрашыуында. "Был - беҙҙең өсөн бик мөһим тема. "Мәскәү-Екатеринбург" юғары тиҙлекле магистрале проекты тураһында беләһегеҙ. Беҙ Өфөнөң ошо трассаға инеүе мәсьәләһен тикшерҙек. Рәсәйҙең ҙур һәм кәрәкле проектында ныҡыныу беҙҙең өсөн бик мөһим. Республикабыҙҙа йәшәүселәр ҙә юғары тиҙлекле магистраль менән файҙаланып, Мәскәүгә һәм Екатеринбургка тиҙ генә барып етә алһын өсөн беҙҙең дә өлөшөбөҙ булыуы мөһим", - тине Радий Хәбиров, осрашыу йомғаҡтары буйынса журналистарҙың һорауҙарына яуап биреп.

# ПАРИЖДА ТАНЫШТЫРҘЫЛАР

**Париждағы Рәсәй фән һәм мәҙәниәт үҙәгендә республикабыҙҙың ЮНЕСКО менән хеҙмәттәшлек итеүенә 20 йыл тулыуға арнап, Башҡортостан менән таныштырыу сараһы үтте. Презентацияны асыуҙа һәм башҡа сараларҙа Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов етәкселегендәге рәсми делегация ҡатнашты.**



Сараның төп маҡсаты халыҡ-ара йәмәғәтселеккә Бөтә донъя ЮНЕСКО мираҫы исемлегенә ҡушыу өсөн Шүлгәнташ мәмерйәһе һүрәттәре һәм ЮНЕСКО-ның глобаль селтәренә индереү өсөн Рәсәйҙәге тәүге геопарк - "Янғантау" тураһында мәғлүмәт биреү ине. Объекттар буйынса түңәрәк ҡорҙарҙа рәсми кешеләр, ЮНЕСКО белгестәре һәм эксперттары, Башҡортостан, Рәсәй, Франция ғалимдары, Францияның һәм сит илдәрҙең музей-ҡурсаулыҡтары, ЮНЕСКО халыҡ-ара статусын алған музей комплекстары һәм геопарктар вәкилдәре ҡатнашты. Белешмә. Бөрйән районындағы Шүлгәнташ мәмерйәһе палеолит осоронда йәшәгән кешеләрҙең ҡаяға төшөргән һүрәттәре аша бөтөн донъяла танылыу яуланы. Бында мамонт, ат, дөйә һәм башҡа хайуандарҙың, антропоморф һындарҙың 200-ләгән рәсеме асыҡланған. Ошо һүрәттәрҙе яҡлау һәм һаҡлау маҡсатында Шүлгәнташ Бөтә донъя ЮНЕСКО мираҫы исемлегенә инеүгә дәғүә итә. Ә "Янғантау" геопаркында халыҡ-ара һәм милли әһәмиәттәге 20-нән ашыу геологик объект бар. Республиканың геопаркты ЮНЕСКО-ның глобаль селтәренә индереүгә ғаризаһы уҙған йылдың ноябрь айында бирелгән.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөләге Салауат Юлаев майҙанында 21 ноябрҙә 28 метрлыҡ шыршы ҡуйылды. Урман ҡупшыҡайын Нуриман районынан алып килгәндәр. Икенсе төп майҙансыҡта - Ленин исемендәге майҙанда - шыршы шулай уҡ үҙенең ғәҙәти урынын алды. Күп кенә сауҙа предприятиелары шыршылар ҡуйған, витриналарҙы, бутиктарҙы биҙәү башланған. Кәйеф булдырыуға иллюминация ла булышлыҡ итә. Уны 25 ноябрҙә ҡабыҙыу күҙаллана.

✓ Өфө ҡала округы Советы ултырышында ҡала бюджетына яҡынса йомғаҡ яһалды (1 ноябргә ҡарата). 2018 йылда ҡала бюджеты дефициты 52,9 миллион һумдан юғары булмаҫ тип билдәләнә. 2017 йылда Өфө бюджеты 400 миллион һум дефицит менән үтәлгән. Өфө бюджеты килеменең 2019 йылға фаразланған дөйөм күләме 23,7 миллиард һумға планлаштырылған, сығымдар ҙа шунсама тәшкил итә.

✓ Өфө ҡала Советы депутаттары 5 декабрҙә баш ҡаланың 2019 йылға бюджеты буйынса асыҡ тыңлауҙар үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте. Улар Ҡала мәҙәниәт һарайында уҙа. Өфөлә йәшәгән һәр кем сарала ҡатнаша һәм ҡала ҡаҙнаһын булдырыу буйынса тәҡдимдәр индерә ала.

✓ Ҡалаларҙың конкурентлыҡҡа һәләтлеге рейтингында Өфө Рәсәйҙең 13 миллионлы ҡалалары араһында - алтынсы, 600 мендән ашыу кеше йәшәгән биш субмиллионлы ҡаланы иҫәпкә индергәндә- һигеҙенсе урынды биләй. Өфө торлаҡ менән тәьмин ителгәнлек буйынса миллионлы ҡалалар араһында да һуңғы урында тора. Шул уҡ ваҡытта иҡтисади үҫеш күрһәткестәренең күпселеге буйынса Өфө конкурентлыҡҡа һәләтлек рейтингында тәүге урындарҙы биләй. Халыҡтың тәбиғи үҫеше буйынса Өфө һигеҙ йыл буйына 1-2-се урындарҙы биләнә, ләкин уҙған йылда һигеҙенсегә төштө.

✓ Ҡала хакимиәтендә киҙеү һәм ОРВИ сирҙәре, халыҡҡа вакцинация үткәреү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үтте. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы фараздары буйынса, киҙеү осоронда А1-Мичиган, А2-Сингапур һәм В-Колорадо вирусы штамдары таралыуы күҙаллана. Өфөлә һәм тотош Башҡортостанда халыҡтың сентябрь башынан уҡ ғәҙәти киҫкен респиратор-вирус сирҙәр менән ауырыуы күҙәтелә.

✔ *"Мәҙәни өлөштә Өфөнө, уның матурлығын, Башҡортостандың милли колоритын бар тулылығында күрһәтергә кәрәк", - тип белдерҙе һәм сараға әҙерлекте дауам итеп, уны юғары кимәлдә үткәрергә йөкләмә бирҙе.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Сираттағы оператив кәңәшмә уҙған ял көндәрендәге һауа торошо һөҙөмтәһендә килеп тыуған хәл-тороштан башланды. Сөнки тәбиғәт ғәли йәнәптәренең ҡасан көйһөҙләнерен хәҙер синоптиктар ҙа фаразлай алмай һәм ул көтмәгәндә генә сюрприз эшләй ҙә ҡуя. Шуға күрә, ошо ике көндә ҡарлы ямғыр яуыуы, көндәрҙең ҡапыл һыуытыуы юлдарҙа боҙлауыҡ барлыҡҡа килеүенә сәбәпсе булды ла инде.**

# ТАҒЫ БЫСРАҠТАР БАШЛАНДЫ...

Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин бәйән итеүенсә, коммуналь һәм торлаҡ хеҙмәттәре эшсәндәренә юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн тәүлек әйләнәһенә оператив режимда эшләргә тура килгән. Тау үрҙәренә, күперҙәргә, юлдарға, хәүефле участкаларға ғына түгел, тротуарҙарға, ихаталарға тоҙ ҡушылған ҡомташ ҡатнашмаһы һибелгән. Әммә бер проблеманы хәл итеү икенсеһен тыуҙыра - таҙалығы менән әллә ни айырылмаған ҡала урамдары бысраҡҡа батты. Ирекһеҙҙән, республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировта, ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафинда ғына түгел, ябай граждандарҙа ла һорау тыуа: ул тиклем бысраҡ ҡайҙан сыға? Уйлап ҡараһаң, Өфөлә ҡышын ғына түгел, яҙынйәйен дә ямғыр яуып үтһә, машиналар ҡарағайһыҙға әйләнә. Ә инде аяҡ кейемеңә ҡунған саң-туҙан, ямғыр яуып үткәндән һуң йәбешкән бысраҡ тураһында әйтеп тә тораһы түгел... Шуға ла оператив кәңәшмәлә яуаплы ойошмаларға ҡатнашма өсөн ҡулланылған ҡомташ составын яҡшылап тикшереү бурысы йөкмәтелде. Әлбиттә, башҡа ҡалалар өлгөһөнә эйәреп, юлдарҙағы боҙлауыҡтарҙы, ҡарҙы иретеү өсөн реагент ҡулланырға мөмкин, ләкин улар аяҡ кейемен, транспорттың резинаһын ашай. Юҡҡа ғына Мәскәү халҡы ҡыш буйына бер нисә пар аяҡ кейеме туҙҙырыуына зарлана тиһегеҙме? Проблема берәү булһа ла, уның бына шундай икенсе кире яҡтары ла бар. Ә инде проблеманың төбөнә төшөп тикшерә башлаһаң, ҡаланы төҙөкләндереү планын һәм проектын тамырынан үҙгәртеп ҡорорға тура киләсәк...

Шулай уҡ Өлфәт Мансур улы кәңәшмәлә төрлө предприятие-ойошмаларҙың үҙ ҡарамаҡтарында булған территорияның төҙөклөгө һәм таҙалығы өсөн яуаплы булыуын тағы бер тапҡыр билдәләне. Тимәк, үҙ территорияларын улар үҙҙәре таҙартырға, тейешле хәүефһеҙлек шарттары булдырырға тейеш. Ә инде ниндәй участка өсөн кем яуаплы икәнен ҡала хакимиәтенең рәсми сайтындағы интерактив карта ярҙамында белергә мөмкин. Өлфәт Мостафин район хакимиәте башлыҡтарына карталағы мәғлүмәттәрҙе яңыртыуҙы контролләргә, шулай уҡ биналарҙы ҡуртымға алыусылар менән эште әүҙемләштерергә ҡушты.

2019 йылда Өфө Йәйге Халыҡ-ара Балалар уйындарын ҡабул итергә әҙерләнә. Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов белдереүенсә, төп маҡсаты балалар спортын үҫтереү, дуҫтарса мөнәсәбәттәр булдырыу, балаларҙың төрлө илдәрҙәге тиҫтерҙәре менән аралашыуы булған был сарала барлыҡ ҡитғаларҙың 35 иленең 80 ҡалаһынан 1500 йәш спортсының ҡатнашыуы көтөлә. Әле 31 ҡала үҙенең ҡатнашыуын раҫлаған да инде. Октябрь һуңында ирекмәндәр йәлеп итеү башланған, барлығы 600 волонтер талап ителһә, 400 гариза килгән. Әлеге ваҡытта судьяларҙы әҙерләү, спорт төрҙәре буйынса йыйылма командалар туплау, кәрәкле спорт инвентарен һәм ҡоралдарын алыу мәсьәләһе хәл ителә. Ярыштарҙан тыш, Уйындарҙа ҡатнашыусылар, ҡунаҡтар өсөн рәсми һәм күңел асыу программаһы ҡаралған. Сығыш яһаусыны тыңлағандан һуң ҡала хакимиәте башлығы: "Халыҡ-ара Балалар уйындары унда ҡатнашыусыларҙың күңелендә ыңғай тәьҫораттар ғына ҡалдырырға тейеш. Бынан тыш, мәҙәни өлөштә Өфөнө, уның матурлығын, Башҡортостандың милли колоритын бар тулылығында күрһәтергә кәрәк", - тип белдерҙе һәм сараға әҙерлекте дауам итеп, уны юғары кимәлдә үткәрергә йөкләмә бирҙе.

Өфө ҡалаһы территорияһында һалымдарҙың йыйылыуы тураһында Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Гүзәл Вәхитова сығыш яһаны.

Кәңәшмә һуңында, ғәҙәттәгесә, "өйгә эш", йәғни үткән аҙнала ҡуйылған бурыстарҙың нисек атҡарылыуы тикшерелде. Тәү сиратта урамдарҙы яҡтыртыу селтәрҙәрен муниципаль милеккә күсереү мәсьәләһе ҡаралды. Әлеге ваҡытта инвентаризация эштәре тормошҡа ашырыла, уның барышында селтәрҙәрҙең ныҡ таушалыуы, тейешле документацияның булмауы асыҡлана. Ошо проблемалар арҡаһында ҡайһы бер селтәрҙәрҙе муниципаль милеккә күсереү тотҡарлана. Дөйөм алғанда, Гәрәбә (Янтарная), Баланов урамдарында, 257-се, 53-сө балалар баҡсаларында яҡтылыҡ булдырылған. Проблемаларҙы бөтөрөү буйынса эш дауам итә.

Аҙна дауамында пассажирҙар транспорты өлкәһендә ниндәй үҙгәрештәр булыуы тураһында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары - Транспорт һәм бәйләнеш идаралығы начальнигы Андрей Федосов таныштырҙы. 18 маршруттың эшмәкәрлеге тергеҙелгән, уларға үҙгәрештәр индерелгән. Һәр биҫтә халҡы транспорт хеҙмәте менән тәьмин ителгән. Айырым мәсьәләләр буйынса көндәлек эш алып барыла, улар ниндәй сығып хәл ителә, контролдә тотола.

Үткән аҙналарҙа республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров мөһим мәсьәләләргә иғтибарын йүнәлтеп, һаулыҡ һаҡлау проблемаһына ла шелтә һүҙҙәре әләккәйне. Был йәһәттән Өфө ҡалаһы буйынса хәлдәр ниндәй торошта икән? Ҡала хакимиәтенең Халыҡтың сәләмәтлеген һаҡлау бүлеге начальнигы Рәдиф Сабиров белдереүенсә, хеҙмәт барлыҡ фельдшер-акушер пункттарын тиерлек йөрөп ҡарап сыҡҡан. 10 объектта хәл-торош ҡәнәғәтләнерлек түгел. Зининола, Нуғайҙа биналар ремонт талап итһә, Макроусоволағы объект муниципаль милеккә ҡарамай, канализация юҡ, аҙнаһына бер тапҡыр башҡа пункттарҙан белгестәр килеп, ҡабул итеү үткәрә. Орджоникидзе районына ҡараған Никольское ауылында фельдшер-акушер пункты вагончикты хәтерләтә. Иҫке Александровкала 530 кеше йәшәһә лә, пункт эшләмәй, бина ремонт талап итә.

Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин ҡыҙыҡһыныусы ойошмаларға проблемалы объекттарҙы тикшереп, улар буйынса проект-смета документацияларын эшләргә ҡушты. Бәлки, тиҙҙән боҙ урынынан ҡуҙғалыр...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## БАЛА ТАП ТА...

**Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин Әсәлек капиталын биреү буйынса ҡарар ҡабул итеү ваҡытын ике тапҡырға ҡыҫҡартыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы.** Шулай итеп, төбәк Пенсия фонды Әсәлек капиталын алыу өсөн ғаризаны бер ай түгел, ә 15 көн эсендә ҡарарға тейеш. Пенсия фондына ата-әсә тураһында мәғлүмәт тапшырған ойошмалар һорауға элеккесә ике аҙна урынына биш көндә яуап бирергә бурыслы. Билдәле булыуынса, балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы программаһы эшләй башлағандан алып республикала 295 мең Әсәлек капиталы сертификаты бирелгән. Әсәлек капиталының күләме ваҡыты менән индексациялана. 2019 йылда ул 453 мең һум була, 2020-лә - 470 мең һумға тиклем, ә 2021 йылда 489 мең һумға ҡәҙәр арта. Индексация бюджет проектында билдәләнгән. Әле Рәсәйҙә Әсәлек капиталының күләме 453 мең 26 һум тәшкил итә.

## ҠИММӘТЛӘНӘ...

**Рәсәй Хөкүмәте башлығы Дмитрий Медведев 2019 йылда торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙы ике этапта индексациялау тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы.** Түләү тәүҙә 1 ғинуарҙан, һуңынан 2019 йылдың 1 июленән арттырыла. "2019 йылдың 1 ғинуарынан өҫтәлгән хаҡҡа һалым ставкаһын 18-ҙән 20 процентҡа тиклем арттырыуға бәйле, 2019 йылдың 1 ғинуарынан граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүен 1,7 процент кимәлендә, ә 2019 йылдың 1 июленән 2019 йылдың ғинуарына ҡарата тағы ла 2,4 процент кимәлендә индексациялау тураһында ҡарар ҡабул ителде. Был 2019 йылдың 1 ғинуарына һәм 1 июленә билдәләнгән түләүҙәрҙең индекстарын бергә ҡушыуҙы аңлата. Әлеге ваҡытта граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүе бер тапҡыр - 1 июлдә генә, ҡағыҙа буларак, уртаса 4 процент кимәлендә индексациялана ине", - тип асыҡлыҡ индерелә Рәсәй Хөкүмәте сайтында.

## БЕР АҘ ЯРҘАМ...

**2019 йылдың 1 ғинуарынан тәрбиәгә алған һәм патронат ғаиләләрҙәге балаларҙы ҡарауға айлыҡ пособиелар, тәрбиәгә алған һәм патронат атаәсәләргә тейешле түләүҙәр, опекаға һәм попечителлеккә бирелгән балаларҙы ҡарау өсөн пособиелар күләме 4 процентҡа арттырыла.** "Республикала бындай индексация даими уҙғарыла. Ағымдағы йылда улар һиҙелерлек артты - 2018 йылдың 1 ғинуарынан республика парламенты ҡарары менән бер юлы 16 процентҡа күтәрелде. Быйыл индексация бик ҙур түгел, шуға ҡарамаҫтан, йыл йомғаҡтары буйынса фаразланған инфляция кимәленән юғарыраҡ", - тине республика парламенты спикеры Константин Толкачев. Закон проекты буйынса аҙаҡҡы ҡарарҙы Дәүләт Йыйылышы депутаттары йыл һуңына тиклем ҡабул итергә тейеш. Пособиеларҙың аныҡ күләме ғаиләнең торөнә, балаларҙың һаулыҡ торошона, уларҙың һанына, башҡа шарттарға бәйле тирбәлә һәм индексациянан һуң бер балаға 6 350 һумдан 11 249 һумға тиклем күтәрелә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ауырыуҙан һаҡланығыҙ

❖ Ҡулъяулыҡҡа аҡ шыршы (пихта), лаванда йәки әрем майы һөртөргә һәм ваҡыты-ваҡыты менән уны танауға һәм ауыҙға ҡуйып, ошо ҡулъяулыҡ аша тыш алырға. Был ысулды айырыуса йәмәғәт транспортында ҡулланыу яҡшы.

❖ Йәмәғәт транспортында саҡта ауыҙға 1-2 бөртөк ҡәнәфер, лимон ҡабығы ҡабырға була. Был продукттарҙағы фитонцидтар вирустарҙы юҡҡа сығарасаҡ.

❖ Миҙгел ауырыуҙары көсәйгән саҡта һөттән һәм һөт ризыҡтарынан баш тартығыҙ. Һәр иртә әфлисун, грейпфрут һуты эсегеҙ, кисен һуған, һарымһаҡлы салат ашағыҙ.

### Стоматит

❖ 10 грамм киптерелгән ҡайын бөрөһөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнап ултырған һауытта 20 минут торорға. Ҡайнатҡан саҡта төнәтмә кәмейәсәк, шуға стаканды тултырғансы ҡайнар һыу өҫтәргә. Ауыҙҙы йыш ҡына сайҡатып торорға.

❖ Ҡайын япрағы төнәтмәһен ҡулланырға була, уны ҡайын бөрөһө төнәтмәһе кеүек әҙерләйҙәр.

### Варикоз

❖ Ҡыҙыл күсәнле кәбеҫтәнең бер нисә япрағын яҡшылап йомшартып, ауыртҡан урындарға һалырға һәм ныҡ ҡыҫмай ғына бәйләргә. Кәрәк булған һайын япраҡтарҙы алыштырып торорға. Төнгөләккә компресс эшләү кәңәш ителмәй, сөнки ул ҡан йөрөшөн насарайтасаҡ, был иһә сирҙе тағы ла көсәйтеп ебәреүе ихтимал.

❖ Варикоздан каланхоэ төнәтмәһе лә файҙалы. Ярты литрлы һауыттың яртыһына тиклем каланхоэ япраҡтарын тултырырға һәм өҫтөнә 70 процентлы спирт ҡойорға. Бер аҙнаға ҡараңғы урында торорға. Кис һайын ошо төнәтмәне табандарҙан башлап тубыҡҡа ҡарай иплəп кенә һөртөргә (ыуырға ярамай!). Бер нисә тапҡыр ҡулланғандан һуң, һыҙланмай башлаһығыҙ, әммә дауаны 4 ай тирәһе дауам итергә кәрәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Башҡорт теленең статусын һаҡлап ҡалыу мәсьәләһенә туранан-тура бәйле тағы ла бер мөһим теманы - милли кадрҙар тәрбиәләү мәсьәләһен академик Фәнил Фәйзуллин күтәреп сыҡты.*



*ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ*



*Константин УШИНСКИЙ*

# ҒӘҘӘТМЕ?

## Ул ябай сифат түгел

Ғәҙәт, тип, бығаса баланың холҡонда булмаған, әммә аҙаҡ барлыҡҡа килгән сифаттарын әйтәбеҙ: әйтәйек, һалҡынға, эҫегә, шау-шыуға, һелкенеүгә, ауыртыуға һәм башҡаларға өйрәнеп, күнегеп китеү. Ундай ғәҙәтте һүлпән ғәҙәт тип атарға мөмкин. Бындай һынауҙарҙы элегерәк күтәрә алмаһа ла, хатта сәләмәтлегенә зыян килерлек булһа ла, даими ҡабатланып торғанлыҡтан, кеше уға күнегеп китә. Шулай итеп, кеше тәүҙәрәк түҙеп торғоһоҙ булған эҫегә лә сыҙай башлай, хатта өйрәнмәгән кеше өсөн үлемесле булған күләмдәге ағыуға ла күнегә.

Кеше аҙ-аҙлап күнекмәләр үткәреү арҡаһында ауыр әйбер күтәрә, арымайынса бик оҙаҡ йөрөй ала, тиҙ һәм дөрөҫ итеп хисапларға өйрәнә, башҡа төр аҡыл хеҙмәте менән шөғөлләнергә лә ғәҙәтләнеп китә. Ғәҙәткә инеп киткән бындай күнекмәләрҙе башҡарыу өсөн уны аңлау, фекерләү мохтажлығы юҡ. Ғәҙәт ни тиклем иртәрәк башлана - шул тиклем тотороҡлораҡ була. Йәшерәк кеше яңы ғәҙәттәргә тиҙерәк күнегә һәм шулай уҡ еңелерәк онота ла.

Ғәҙәт беҙ уйлағанса ябай сифат түгел. Ҡабат-ҡабат эшләнгән күнекмәләр генә ғәҙәткә әйләнеп китә. Әлбиттә, сабый ваҡытта бала тыумыштан булған күнекмәләр менән эш итә: күреү, илау, ашау, ауыртҡан ерҙе ҡул менән һыйпау, ҡысҡырыу һәм башҡалар. Телебеҙ асылмаған саҡта башҡарылған күнекмәләр аҙаҡ та тороп ҡала, әммә уның ҡасан һәм нисек башланғанлығын беҙ хәтерләмәйәсәкбеҙ. Әммә шуныһы асыҡ: теле асылмаған баланың хәтере була. Сөнки сабый даими аралашҡан кешеһененең йөҙөн, тауышын һәм башҡаларҙы хәтерләй. Беҙгә тағы бик мөһим нәмәне зиһенебеҙгә һеңдерергә кәрәк: бала физик яҡтан ғына үҫешмәй, ул тыуғас та уның күңел донъяһы ла үҫә башлай. Әлбиттә, күңел донъяһының үҫешен беҙ күҙәтә лә, төҙәтә лә алмайбыҙ, әммә ошо хәҡиҡәтте белгәндән һуң, уға күңел донъяһын үҫтереүгә ҡамасаулаусы нәмәләрҙе булдырмау ҡулыбыҙҙан килә. Уға ҡарата тыныс һәм матур мөнәсәбәт булдыра алабыҙ. Баланың теле асылғанға тиклем үк күреп таныған кешеләре уға ныҡ тәьҫир итә һәм зиһенендә уйыла. Уға булған тәүге мөнәсәбәттәр артабан уның башҡаларға булған мөнәсәбәтенә тәьҫир итә. Әгәр инде уның тәүге күргәне йылмайып торған Әсәһе булһа, сабый өсөн оло бәхет.

Сабыйҙың тәүге йылмайыуы, ҡулдарын һуҙыуы, әсәһе менән атаһын таный башлауы - был үҙгәрештәрҙең бала өсөн ниндәй көс талап иткәнлеге беҙгә билдәһеҙ. Ул һөйләшә башлау менән зиһене яҡтыра барасаҡ һәм теле асылғанға тиклем булған үҫеш артабан бергә бәйләнеп китәсәк. Шулай итеп, баланың теле асылғанға тиклем алған тәьҫораттары артабанғы тотош тормошона нигеҙ була. Ошо ваҡытта алған тәьҫораттарҙан сығып, уның кешегә һәм тәбиғәткә булған мөнәсәбәте - ғәҙәте билдәләнә. Баланың ғәҙәте аша уның күңел донъяһына тәьҫир итеп була.

Баланың холҡо-фиғеле генә түгел, уның белем алыуы, артабанғы үҫеше ғәҙәттәренә бәйле. Баланы уҡырға, яҙырға өйрәткән кешегә ғәҙәттең ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булғанлығы асыҡ күренә. Тимәк, теге йәки был ғәҙәткә өйрәтеү ҡабатлатҡан күнекмәләрҙән тора. Күнекмәләр аша ғәҙәткә инеп киткән сифаттар балаға артабанғы тормошонда ярҙам итә. Әйтәйек, яҙырға өйрәнгән саҡта уға ҙур ихтыяр көсө кәрәк. Ихтыяр көсө бирәй нәмәне эшләүҙе ҡабат-ҡабат талап итеүҙән башлана. Һеҙ талап иткән нәмә баланың ғәҙәтенә әүерелгәс, артабанғыһын талап итә башларға кәрәк. Бер юлы бер нисә талап ҡуйып, ҡайһы береһен аҙағына еткереүҙе шарт итеп ҡуймаһаң, йомшаҡлыҡ ебәрһәң, ихтыяр көсө тигән ышаныслы тәрбиә көсөнән мәхрүм ҡаласаҡһығыҙ. Шуның өсөн баланан талап иткән ҡағиҙәләрҙе өҫтө-өҫтөнә өйөү дөрөҫ булмай.

**(Дауамы бар).**

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

# ЫРЫУЫҢДЫҢ...

## лайыҡлы вәкиле булырға!

**Республикала йәштәрҙе берләштергән һәм эшмәкәрлеге буйынса төрлө өлкәләргә ҡараған, төрлө милләт йәштәрен туплаған йәмәғәт ойошмалары байтаҡ ҡына. Ә бына башҡорт йәштәрен генә йыйған, уларҙың рухи, мәҙәни, социаль-сәйәси һәм башҡа төрлө талаптарын ҡәнәғәтләндергәндәй йәмәғәт ойошмалары һирәк. Шуға күрә, яңы барлыҡҡа килгән "Мең ырыуы" төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы ҡарамағында йәштәр берләшмәһе барлыҡҡа килеүе ҡыҙыҡһыныу уятты һәм беҙ уларҙың I ойоштороу йыйынына юлландыҡ.**

Йәштәрҙең саҡырыуын филология фәндәре докторы, шағир Рәшит Шәкүр, философия фәндәре докторы Фәнил Фәйзуллин, "Мең ырыуы" төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы советы рәйесе Әхнәф Тимербулатов, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов ихлас ҡабул иткән. Улар йыйындың ике быуын кешеләрен осраштырыу һәм бер-береһен ишетергә, уртаҡ мәсьәләләр буйынса фекер алышырға, уларҙы хәл итеү юлдарын бергәләп эҙләргә булышлыҡ итеү маҡсатын хуплап, йәштәр менән туған телебеҙҙе һаҡлау һәм үҫтереү, милли кадрҙар тәрбиәләү, сәләмәт һәм рухлы алмаш үҫтереү, социаль-иҡтисади хәлде яҡшыртыу мәсьәләләре буйынса диалог ҡорҙо.

Профессор Рәшит Шәкүр башҡорт телен һаҡлау темаһына ҡағылып, бигерәк тә һарайлы-меңлеләрҙең 1920 йылдарҙан башлап татарса уҡытыуға күсерелеүе һөҙөмтәһен борсолоп телгә алды. Теле үҙгәргәс, тамырын да онота кеше - ошо хәҡиҡәтте аңлатып һөйләне аҡһаҡал йыйылыштағыларға.

Башҡорт теленең статусын һаҡлап ҡалыу мәсьәләһенә туранан-тура бәйле тағы ла бер мөһим теманы - милли кадрҙар тәрбиәләү мәсьәләһен академик Фәнил Фәйзуллин күтәреп сыҡты. Уның билдәләүенсә, башҡорт халҡының мәнфәғәтен сит-яттар ҡайғыртмаясаҡ, быны күптән аңлаһаҡ та, бөгөнгә тиклем төрлө дәүләт структураларына башҡорт кадрҙарын "индереү" йәһәтенән эштәр аҡһай. Республикала йөҙҙән ашыу милләт вәкилдәре йәшәй тип һанайбыҙ икән, тәү сиратта үҙебеҙҙең милли кадрҙар сәйәсәтен тормошҡа ашырыу механизмын эшләргә тейешбеҙ, тип иҫәпләй Фәнил Сәит улы. Ул шулай уҡ интеллигенцияның интеллектуаль кимәле, рухи байлығы мөһимлеге буйынса социаль-иҡтисади проблемаларҙан ҡалышмай, тине һәм халыҡтың сәйәси мәҙәнилеген үҫтереү йәһәтенән дә тейешле эш алып барылмауы тураһында белдерҙе.

Ойоштороусылар йыйынға БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, БР буйынса Эске эштәр министрлығының наркотиктар ҡулланылышын контролдә тотоу идаралығы, Республика клиник перинаталь үҙәге вәкилдәрен дә саҡырғайны. Улар йәштәргә республикала милли спорт төрҙәрен үҫтереү, интернет селтәре аша наркотик матдәләр таратыусы сайттар тәьҫиренә эләкмәү, ни өсөн илдә демография үҫеше мөһим булыуы тураһында бәйән итте.

Үрҙә телгә алған темаларҙан тыш, йыйында эшҡыуарлыҡ өлкәһендә уңыш ҡаҙаныусы йәштәр үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлашты. "Энерго-Сервис" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры Дамир Рысаев уңыш ҡаҙаныу өсөн эшҡыуар үҙе белгән эшкә тотонорға, үҙе кеүек маҡсатлы кешеләр менән аралашырға, белмәгәнен башҡаларҙан һорауҙан ҡурҡмаҫҡа тейеш, тигән фекерҙә. Уның һүҙҙәрен уҡыусы сағында уҡ беренсе бизнесын булдырған Шәфҡәт Собханғолов та ҡеүәтләне. Башта кондиционерҙар ҡуйыу менән эш башлаған йәш кеше шуға өҫтәп бейек биналар ҡыйығын ҡарҙан таҙартыу һәм төҙөлөш-монтаж белгестәренән торған бригадалар ойошторған. Өс төрлө эште бер юлы килемле итеп ойоштороу өсөн уға сәйәсәттә лә, социаль-иҡтисади мәсьәләләрҙә лә хәбәрҙәр булырға, халыҡ менән дә уртаҡ тел таба белергә тура килә.

Шулай ҙа эшҡыуарҙың төп сифаты - ныҡышмаллыҡтыр, моғайын. Быға Ҡырмыҫҡалы районында ерләү хеҙмәтен булдырған Тимерғәзим Усманов үҙ тәжрибәһе менән таныштырғас инандыҡ. 28 йыл буйы колхоз рәйесе булып эшләп, олоғайғас, үҙ эшен асырға дәрт тапҡан кешенең телмәре фәһем алырлыҡ булды. "Рәсәйҙә пенсияға ғына кешесә йәшәп булмай, - тине Тимерғәзим Әһелулла улы. - Мин дә уйланым-уйланым да, башта мал аҫрап ҡараным, ит һатыу менән уңышһыҙлыҡҡа тарығас, ҡуяндар үрсетеүгә тотондом. Ҡуяндарым инде 100 башҡа еткәйне, балалары юғала башланы. Шуға уларҙың бөтәһен дә һуйып, әллә өс, әллә дүрт йыл ашаныҡ тегеләрҙе. Уйлап йөрөй торғас, районда кешене һуңғы юлға оҙатыу буйынса хеҙмәт юҡ икәнен белеп, шул эште асып ебәрҙем..." Сара "Мең ырыуы" төбәк йәмәғәт ойошмаһының йәштәр берләшмәһе ҡағиҙәләрен һәм ҡарарын ҡабул итеү менән тамамланды. Өфө ҡалаһы, Әлшәй, Ауырғазы, Бишбүләк, Благовещен, Благовар, Дәүләкән, Иглин, Миәкә, Нуриман, Шишмә райондары территорияһында, Ҡырмыҫҡалы, Стәрлетамаҡ һәм Бүздәк райондарының бер өлөшөндә йәшәүсе мең ырыуы башҡорттары был документтарҙа үҙҙәренең төп бурыстарын билдәләне. Ҡарарҙың тәүге пункты былай яңғырай: "Туған телде һәм башҡорт халҡын этнос булараҡ һаҡлауҙы төп бурысыбыҙ итеп һанарға. Цивилизациялы донъяла ырыуҙың лайыҡлы вәкиле булырға, һәр ваҡыт халыҡ именлеге тураһында, мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт үҫеше, сәләмәт тормош тураһында хәстәрлек күрергә".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәшит Шәкүр үҙенең сығышында халыҡ тормошонда иң яуаплы мәлдәрҙә аренаға йәштәр сығыуы, Салауат Юлаев 22 йәштә - полководец, Әхмәтзәки Вәлиди 27 йәшендә - Рәсәй федерализмына нигеҙ һалыусы һәм Башҡортостан автономияһы идеяһын күтәреп сыҡҡан бөйөк сәйәси эшмәкәр, Муса Гәрәев 23 йәшендә бер юлы ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы тип танылыуын иҫкә төшөрҙө. Ил, республика, милләт яҙмышы өсөн яуаплылыҡ йөкмәргә әҙерләнгән йәштәр, ысынлап та, был өлгөләр тураһында белергә тейеш әлбиттә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*СӘЙЕР ҒӘҘӘТ*

# БӘХЕТ ЮРАЙЫМ ДА ЙӨРӨЙӨМ...

**Төрлө ырымдарға, юрауҙарға ышаныусан кешеләр күп арабыҙҙа. Кемдер мине лә шундайҙар рәтенә индерер, бәлки. Мин бәхет юрай торған ырымдарҙы күп беләм.**

Бөгөнгө заманда йәшәүе былай ҙа еңел түгел. Ә мин тормошомда ыңғай ваҡиғалар күберәк булыуын теләйем. Әйтәйек, көҙгө байлыҡты өйгә индереп тултырғас, ваҡ себендәр күбәйеп китте икән, ти. Күҙгә, ауыҙға инеп кенә барған ваҡ себенгә көйөргә лә була, әлбиттә. Ә мин, эсеп ултырған сәйемә ваҡ себен килеп төшә икән, көтөлмәгән бәхеткә йә аҡсаға тип юрап ҡуям. Башҡаларҙы ла шуға ышандырырға маташам әле, етмәһә.

Ырымдарҙаң һыналғандары ла бар. Төштә йәйғор күрһәң, мотлаҡ бәхеткә була, теләктәрең дә тормошҡа ашасаҡ. Юлда даға табып алһаң да бәхеткә. Сыбар ала аттың артҡы тояҡтарынан төшөп ҡалған даға табып алһағыҙ, бәхеттең үҙе был. Юлда табылған дағаға өшкөрөп-төкөрөп, теләк теләп, һул яурын аша артҡа ташлаһаң, ошо теләгең тормошҡа аша. Тутыҡҡан ҡаҙаҡ табып, уны өйгә алып ҡайтһаң да яҡшыға. Яңылыш ҡына һауыт-һаба ярылһа, ҡунаҡ килеүгә юрала. Урамда китеп барғанда һауанан ҡош тиҙәге килеп төшөп, өҫтөгөҙҙө бысратһа, аҡсаға юрағыҙ ҙа ҡуйығыҙ, аҡса артыҡ булмай ул. Ауырлы ҡатын күрһәң, мөхәббәттә уңырһың. Яңы йыл табыны артында кемдер сөскөрөп ебәрһә, шунда ултырыусылар өсөн йыл ныҡ уңышлы килер. Өйгә ҡырмыҫҡа оялаһа ла бәхеткә тиҙәр. Иртән ҡоштар һайрауына уянып китһәгеҙ, уңышлы көнгә. Күп күбәләктәр күрһәң, улар таҡ һанда ла булһа, һеҙҙе бәхет көтә. Ҡулыңа ултырған осмалаҡ һеҙ 22-гә тиклем һанағансы осоп китмәһә, бәхетле мөхәббәт көтә. Тулы биҙрәле ҡатын-ҡыҙ һәм буш биҙрәле ир-егет осраһа, көнөгөҙ уңышлы үтер. Яңы өйгә бәхет эйәреп инһен тиһәгеҙ, һәр бүлмәгә икмәк тотоп инегеҙ.

Ҡыҫҡаһы, бындай ырымдарҙы әллә күпме дауам итеп булыр ине. Әлбиттә, уларҙың һәр береһен бер кем дә һынап йөрөмәгән, күп осраҡта әйтәһең дә онотаһың. Әммә ҡысҡырып, бәхеткә, мөхәббәткә, иҫәнлеккә, һаулыҡҡа, байлыҡҡа тип ҡабат-ҡабат әйтә йөрөү һеҙҙе ыңғай уйҙарға көйләр, тормошоғоҙ ҙа ыңғай күренештәрҙән генә тотор. Ошо үҙе бәхет инде ул.

**Камилә ВӘЛИЕВА.**

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**Тарих фәндәре докторы, профессор Нияз МӘЖИТОВ үҙе тере саҡта Өфө ҡалаһының үҙәк өлөшөндәге ҙур археологик асыш тураһында бихисап хеҙмәттәр яҙҙы, мәғлүмәтте Башҡортостан һәм Рәсәй йәмәғәтселеге иғтибарына еткерә торҙо. Нияз Ғәбделхаҡ улы 2006-2007 йылдарҙа Пушкин урамының түбәнге кварталдарында урынлашҡан Өфө-II ҡаласығында алып барылған археологик ҡаҙыу эштәре һөҙөмтәһендә табылған ҙур ултыраҡ ҡалдыҡтарын (ҡәлғә стенаһы, торлаҡ урындары, тимер иретеү мейестәре, ювелир оҫтаханаһы, бик күп табыштар, шул иҫәптән XIV быуат аҡсалары) тикшертеү өсөн ваҡытында Мәскәүҙән һәм Ҡаҙандан юғары квалификациялы белгестәрҙән торған ирекле эксперттар төркөмө саҡырыуға өлгәште. Улар археологик ҡаҙылма материалдары менән ентекләп танышҡас, был ҡаласыҡтың V быуаттан алып XVI баштарына тиклем өҙлөкһөҙ кеше йәшәгән ҙур ултыраҡ (ҡала) цитаделе (кремле) булыуы тураһында һығымта яһаны. Нияз Мәжитовтың гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән был материалы Өфө-II ҡаласығы тарихы һәм башҡа башҡорт ҡалалары тураһында.**

# КҮПТӘН БИЛДӘЛЕ ХӘҠИҠӘТ,

## йәғни IX-X быуаттарҙағы башҡорт ҡалалары тураһында


1542-1629 йылдарҙа төҙөлгән карта.

- Пушкин урамының түбәнге кварталдарында алып барылған археологик ҡаҙыу эштәре ваҡытында йыйылған материалдар уның XIV - XVI быуат яҙма сығанаҡтарында иҫкә алынған Башҡорт ҡалаһы икәнлегенә ышаныслы нигеҙ булып тора, - тип яҙа ғалим. - XIV - XVI быуаттарҙағы географик хеҙмәттәрҙә был ҡала Өфө йылғаһы тамағында, йәғни бөгөнгө Өфө ҡалаһы территорияһында күрһәтелгән, һәм Өфө-II ҡаласығының, ошо территорияла уға синхрон булған башҡа археологик ҡомартҡыларҙың Башҡорт ҡалаһыныҡы булыуы тураһындағы мәсьәлә ябай һәм ышаныслы сиселеш тапты. IX - X быуаттарҙа башҡорттарҙың бер төркөм ҡалалары тураһында урта быуаттарҙың тәү осорона ҡараған яҙма сығанаҡтарҙа бәйән ителеүен дә билдәләп үтергә кәрәк.

Был ҡалалар тураһында фәндә күптән билдәле, тик улар, ни өсөндөр, тикшеренеүселәрҙең иғтибарын йәлеп итмәгән, һәм ошо мәҡәлә уҡыусыларҙы ысынбарлыҡта булған башҡорт ҡалалары менән таныштырыуға арнала. Был мәғлүмәт башҡорттарҙың I һәм II мең йыллыҡтар сиктәрендәге көнкүреше һәм мәҙәниәте тураһында фәндә урын алған фекерҙәрҙе тамырынан үҙгәртергә мәжбүр итә.

Донъя халыҡтары тураһында белешмә материалдар яҙыу XII быуатта йәшәгән күренекле ғәрәп тарихсыһы-географы әл Иҙрисиҙең фәнни маҡсаты була. Уның ҡарамағында боронғо һәм урта быуат авторҙары хеҙмәттәре тупланған ҙур китапхана булған. Әл Иҙриси 57 климат (Урта Азия, Ҡаҙағстан, Көньяҡ Себер һәм Көнсығыш Европа) халыҡтары тарихы тураһында яҙғанда үҙенең билдәле ғәрәп авторҙары Ибн Хордадбәк (IX б.), әл Яҡуби (IX б.), Сәләм Тәрджемән (IX б.), Ибн Хаукал (X б.), әл Мәсғуди (X б.), әл Джәйхани (X б.) һәм башҡа бик күптәрҙең хеҙмәттәрен файҙаланыуы хаҡында махсус белдереп китә. Ошо авторҙарҙың беҙҙең дәүергә күбеһенсә башҡа авторҙар тарафынан ҡыҫҡартылып яҙылған рәүештә генә килеп еткән хеҙмәттәренән тыш, әл Иҙриси сәйәхәтсе, сауҙагәр замандаштарынан алынған мәғлүмәттәрҙе ҡулланған, һәм шуның өсөн уның был хеҙмәтен IX- X быуаттарҙағы Башҡортостан тураһындағы мөһим сығанаҡ, тип баһаларға була.

Әл Иҙрисиҙең "Нузхат алмуштак фи ихтирак ал-афак" ("Донъя гиҙеүҙе хушһынғанға йыуаныс") тигән китабы XIX-XX быуаттарҙа Европа уҡыусыһына А. Жоберҙың француз телендәге "Иҙриси географияһы" баҫмаһы аша таныш була. Академик Б.А. Рыбаков был баҫмаға беренсе һәм иң тулы комментарий яҙған. Әл Иҙриси китабының А. Жобер баҫмаһынан башҡорттар тураһында яҙылған айырым биттәрен һәм Б.А. Рыбаковтың күрһәтелгән хеҙмәтен беҙ Башҡортостан тарихының урта быуаттар осорон яҡтыртҡан тәүге мәҡәләләребеҙҙә ҡулланғайныҡ. Ул ваҡытта уҡ инде әл Иҙрисиҙең IX-XII быуаттарҙағы башҡорттар һәм башҡорт ҡалалары тураһындағы мәғлүмәтенең фәнни яҡтан ҡиммәт булыуы беҙҙә һис бер шик тыуҙырмай ине.

И.Г. Коновалованың "Әл Иҙрисиҙең Көнсығыш Европа илдәре һәм халыҡтары тураһында" исемле китабы баҫылып сығыу ошо мәсьәлә тирәһендәге ситуацияны тамырынан үҙгәртте. Был китапта күрһәтелгән ғәрәп авторының хеҙмәте буйынса элегерәк баҫылып сыҡҡан эштәр тәнҡит күҙлегенән ҡарала, айырым аңлатмаларға, географик атамаларға, исемдәргә ентекле комментарийҙар бирелә. IX-X быуат башҡорттарының көнкүреше, мәҙәниәте тураһындағы мәғлүмәт күләме буйынса ошо баҫма Башҡортостан тарихсылары өсөн айырыуса ҡиммәтле.

Әл Иҙрисиҙең хеҙмәте ике өлөштән тора: карталарҙан һәм халыҡтарҙың көнкүреше һәм мәҙәниәте бәйән ителгән текстарҙан. Уның Көнсығыш Европа картаһында Каспий диңгеҙенә төньяҡтан тауҙарҙан (Урал тауҙары, тип аңларға кәрәк) өс тармаҡ булып башланған бер йылға ҡоя. Әл Иҙриси, урта быуаттар географияһы традицияларына ярашлы, Волга (Итиль) йылғаһының башы рәүешендә Кама, Өфө һәм Әй ҡушылдыҡтары менән Ағиҙел йылғаларын күрһәткән. Әл Иҙрисиҙең картаһын ошолай уҡыу хәҙер дөйөм ҡабул ителгән, тип иҫәпләнә. Уның картаһында башҡорт иле Аскаска тип аталған таулы өлкәлә урынлашҡан, быны Урал тауҙары, тип уйларға кәрәк. Сығанаҡта "Исил (Итиль. - **Авт.)** йылғаһының көнсығыш тармағы басджирттар өлкәһендә башланып, һуңынан бәджнәктәр һәм булғарҙар араһында сик булып, көнбайышҡа табан аға...", тип әйтелә. Ошо һүрәтләүҙә Волга йылғаһына ҡушылғанға тиклем Ағиҙел һәм Кама йылғалары үҙҙәренең ҡушылдыҡтары менән асыҡ тасуирләнә.

Әл Иҙриси хеҙмәтендә башҡорт илендәге биш ҡала иҫкә алына, уларҙың координаттары һәм ҡыҫҡаса һүрәтләнеше бирелә. Мәҫәлән, әл Иҙриси Ҡаруҡийа тигән башҡорт ҡалаһы тураһында бына нимәләр яҙа: "Гүрхан ҡалаһынан Ҡаруҡийаға тиклем Анхадара йылғаһы буйлап һигеҙ көнлөк юл, ә ҡоронан көнбайышҡа табан ун алты күсем. Ҡаруҡийа - ағас ҡоролмаларҙан һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала. Уға ерҙәре бынан ун алты күсем арала булған булғарҙар йыш һөжүм итеп тора, һәм улар әлмисаҡтан бирле бер-береһе менән даими һуғышып йәшәй.

Ҡаруҡийа ҡалаһынан төньяҡҡа Тышҡы башҡорттарға тиклем үтеп сығыуы ауыр булған тауҙар, насар юлдар һәм тар һуҡмаҡтар буйлап ун күсем ара. Ҡаруҡийа һәм Эске башҡорттар араһы үтеп сыҡҡыһыҙ тауҙар һәм юлһыҙ ерҙәрҙән ун ике күсем. Басджирттарҙың иле ҙур, уның айырым өлөштәре бер-береһенән ҙур алыҫлыҡта ята. Эске басджирттар иле үҙәге менән Тышҡы басджирттар иле үҙәге араһы ун бер күсем ер. Үҙенең ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса басджирт халҡы төрки-булғарҙарға оҡшаш. Кейемдәре - оҙон халаттар". Бәйән ителгәндәр Ҡаруҡийа ҡалаһының көнбайыш Башҡортостанда урынлашҡанлығын раҫлау өсөн нигеҙ бирә.

**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ОНОТОЛҒАН ҠӘҮЕМ

## Дүрт тараф тураһында

Төрки ғөрөфөндә арауыҡтың өс өлөштән торған вертикаль структураһынан башҡа, донъяның горизонталь көүҙәләнеше лә бар: дүрт тарафы, уңы - һулы, алды - арты. Былар киҫешкән ерҙә шулай уҡ ағас (ҡай сағында тау башында үҫеүсе ағас) була. Донъяның вертикаль һәм горизонталь структураларын сағыштырып ҡарап, уның бөтә булған тороштарын һәм өлкәләрен асыҡларға мөмкин. Донъя үҙәгендә киҫешкән координаттарға таянып, тарафтарҙы һандар аша билдәләп була. Мәҫәлән, Күл-тегин хөрмәтенә ташҡа ырылған яҙмала донъяның дүрт мөйөшөндә (яғында) йәшәүсе халыҡтар иҫкә алына. Һаналып киткән илдәр тураһында ҡояштың күк көмбәҙендәге торошона ҡарап, өҫтәлмә мәғлүмәт бирелә: "... алда - көн тыуған яҡта, унда - түбәлә ҡояш булған тарафта, артта - көн байыған яҡта, һулда - түбәлә төн булған тарафта йәшәүсе халыҡтарҙың барыһы ла миңә буйһона". Бында илдәр ҡояш йөрөшөнә ярашлы һаналып кителә. Төркиҙәр өсөн төп һәм өҫтөнлөклө йүнәлеш ҡояш сыҡҡан тараф булып, күҙәтеүсе йөҙө менән көнсығышҡа ҡарап торған. Шулай булғас, төркиҙәр көнсығышты - алғы, ыңғай, көнбайышты - артҡы, кире, тиҫкәре яҡ, көньяҡты - өҫкө, төньяҡты - аҫҡы тараф, тип ҡабул иткән.

Төркиҙәр көнсығышты, ҡояш сыҡҡан яҡ булараҡ, ыңғай сифаттар менән нарыҡлаған, хөрмәт иткән. Көнбайыш, киреһенсә, ҡояшты йотоусы, батырыусы яҡ булғас, ғүмер бөтөп, юҡ булыу, ата-бабалар иленә күсеү кеүек мотивтар менән бәйле кисерелә. Көньяҡ менән төньяҡ шулай уҡ бер-береһенә ҡаршы: көньяҡ - унда һәм өҫтә, төньяҡ - һулда һәм аҫта булып сыға. Арауыҡтың һәм ваҡыттың билдәле бер тәртипкә һалынған булыуы - урта йәки фани донъяның мөһим характеристикаһы. Шулай итеп, бар донъя ҡапма-ҡаршы булған төшөнсәләр аша һүрәтләнә.

Боронғо төрки халыҡ космогонияһы башлыса мифологик характерҙа төҙөлә. Бер барлыҡҡа килгән мифологик йыһан киңәйә барып, циклик рәүештә үҫешә. Тора-бара яңынан Хаосҡа әйләнһә лә, тәбиғи ритмдарға һәм ритуалдарға буйһоноп, ул тағы ла үҙ гармонияһына кире ҡайта. Ҡапма-ҡаршылыҡтарға ҡоролған, билдәле бер сиктәре булмаған был донъя туҡтауһыҙ үҙгәрештәр кисерә. Ул яңырып торһа ла, ахырына тиклем камиллыҡҡа өлгәшә алмай. Йыһандың хәрәкәте туҡтамай торған пульс рәүешендә булып, трансформациялар кисерә. Тыуҙырыу актында тыуыу үлем менән берлектә булып, башланыу һәм бөтөү, өс һәм аҫ береһен-бере алмаштырып килә. Шулай ҙа кешеләр өсөн донъяның барлыҡҡа килтереүсе, тыуҙырыусы көстәргә эйә булған элементтары мөһимерәк булған.

**Рафаэль БӘҘӘРТИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

*✓ **Путинды әрләйбеҙ, икенсе яҡтан ҡарағанда, беҙ Рәсәйҙә бер ҡасан да былай яҡшы йәшәгәнебеҙ юҡ ине. Был үҙгәрештәр осоро ярайһы һуҙылып китте, быныһы икенсе мәсьәлә, әммә беҙ һәйбәт йәшәйбеҙ.***

# ИКЕ НӘМӘ

## ғаләм һәм

### *КАМИЛ БУҘЫҠАЕВ:*

*Сатира бер ҡасан да насарлыҡ килтермәй, киреһенсә, ул төҙәтә генә. Бигерәк тә сәйәси сатира. Мин гел әйтәм, юмор тойғоһо булмаһа, власҡа үрләргә тырышырға ла кәрәкмәй. Сәйәсәттә юмор тойғоһо булмаған кешеләр юҡ. Ҡайһы бер сәйәсмәндәр, һин, туғаным, ҡатыраҡ төшөргәнһең, әммә дөрөҫ эләктергәнһең, тип тә әйтә. Кеше күрмәгәнде нисек һиҙҙең, тиҙәр.*

**Карикатура - ул шундай художестволы жанр, унда рәссамдың ниндәйҙер шәхескә йәки тормоштағы мөһим ваҡиғаға булған ҡарашы сағыла. Ниндәйҙер кимәлдә карикатурист сәйәсмән дә. Бөгөн билдәле рәссам Камил БУҘЫҠАЕВ менән сәнғәттең ошо үҙенсәлекле йүнәлеше тураһында һөйләшәбеҙ.**

**Был һорау, моғайын, бар уҡыусыларҙы ла ҡыҙыҡһындыралыр: бөгөн карикатурист булараҡ танылыу яулаған Камил Буҙыҡаев быға тиклем нимә менән шөғөлләнгән икән?**

- Был йәһәттән мин бик бәхетле кешемен, ошоға тиклем бер көн дә яратмаған, күңелемә ятмаған эштә эшләгәнем юҡ. Профессиональ рәссаммын. БДПУ-ның художество-графика факультетын тамамлағас, Учалыға ҡайттым. Унда нимә менән генә булышманым. Әйткәндәй, худграфта күп һөнәрҙәргә өйрәттеләр - һүрәт төшөрөргә, скульптураға, ағас эшкәртергә һ.б. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында бик ҡеүәтле факультет ине ул. Нимә теләйһең, шуны эшләй ала инең, ижади мөхит булды. Бөгөн дә декан вазифаһын башҡарған Мәсәлимов Тәлғәт Хәсән улына рәхмәтлемен. Ул минең етәксем булды. Бер ҡасан да ҡысҡырып маҡтамай торғайны, әммә уның ижадыма ыңғай ҡарашын гел тойҙом. Лидия Михайловна Стратонова интернатта ла, вузда ла уҡытты. Григорий Александрович Загвоздкин, живопись уҡытыусыһы - бына улар мине ҡурсалап үҫтерҙе.

Фонтандар ҙа эшләй беләм. Бетон менән эшләргә яратам, ландшафт дизайны менән дә булышам. Тимерлек асып, тимер черепицанан ҡыйыҡтар ҙа яһаным. Заказдар бөтөп, көрсөк башланғас, тимер-томорҙан реклама щиттары яһап, реклама менән шөғөлләнә башланым. Башта ул щитта ярты йыл тирәһе Мортаза Ғөбәйҙулла улының портреты эленеп торҙо әле, аҙаҡтан клиенттар килеп сыҡты. 2008 йылда тағы ла көрсөк башланғайны, Өфөгә сығып киттем. Мәскәү, Силәбе, Яр Саллыла скульптуралар эшләп йөрөнөм, таш менән булыштым. Тағы ла эш булмай башлағас, шәхси эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегемде яптым. Артабан ни эшләргә икән, тип уйланып ултырғанда, һүрәт эшләп, социаль селтәрҙәргә һалғайным, уның ҡыҙыҡһыныу уятҡанын шәйләп ҡалдым. Карикатураға тотоноуым шунан башланды. Хәҙер 2 йылдан ашыу туҡтауһыҙ һүрәттәр төшөрәм.

**Ҡағыҙға төшөргән тәүге карикатурағыҙҙы хәтерләйһегеҙме?**

- Мин урта белемде Республика художество гимназия-интернатында алдым. Унда һәр бала рәссам һәм һәр класта стена гәзите була торғайны. Мин мәктәп гәзитендә рәссам булдым. Интернатта Радик исемле бәләкәй генә буйлы малай булды. Линейкаларҙа завучтар уны тәнәфестә йүгергәне өсөн әрләй торғайны. 10-11 йәшлек баланың тик торған сағы буламы ни? Мин уны шулай итеп һүрәткә төшөрҙөм: оҙон коридор, ә уның буйлап бәләкәй генә Радик йүгереп китеп бара. Был тәүге карикатура ла булмағандыр, бәлки, әммә ул минең хәтеремдә ҡалған. Дәрестә ултырғанда уҡытыусыларҙы ла, хатта директорҙы ла төшөрә инем. Уҡыған саҡта сатирик һүрәттәр буйынса халыҡ-ара конкурста еңеп, "Орленок"ка ла барҙым әле.

Һүрәтте бала саҡтан төшөрһәм дә, журналист булырға хәл итеп, БДУ-ға уҡырға индем. Һәм был минең һөнәрем түгеллеген аңлап, әрмегә киттем. 2 йыл буйына Ленин, ракета, автомат, КамАЗ, танк төшөрҙөм. Ҡайтҡайным, Учалылағы Булат ағайым: "Һин, ҡустым, уҡырға уйлайһыңмы, юҡмы?" - тип һорай. "Барам, юрислыҡҡа барырмын ул", - тип яуаплайым. "Һиңә нимәгә ул юрист? Тыуғаныңдан алып күренеп тора бит, һүрәт төшөргәс, һүрәт төшөр", - тине. Шунан һуң БДПУ-ға уҡырға индем.

**Рәссамлыҡ яҙмышығыҙҙың бөгөн ошолай үҙгәреп китеүенә шатһығыҙмы?**

- Ысынлап та, республика, баш ҡала сиктәрендәге ҙур булмаған йәмғиәттә мин нимәгәлер өлгәштем. Минең менән урамда иҫәнләшәләр, фотоға төшәләр, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре таный. Өфөнөң үҙәгендә персональ күргәҙмәләрем булды. Әлегә мин үҙемдең хәлем менән ҡәнәғәт булырға тейешмендер. Тик мин бер ҡасан да ижадтан йыраҡлашманым, тип тә әйтер инем. Рәссам булараҡ, эштәремдән күңел ҡәнәғәтлеге ала инем. Әйтәйек, ҡәбер таштары яһайһың икән, был да бит ижад.

Рәссамға йәмғиәттең иғтибары кәрәк. Ул тәбиғәте менән нарцисс. Уға эргә-тирәһендәгеләрҙең баһаһы мөһим. Ҡыҙыҡмы, ҡыҙғанысмы, әммә 5-10 йыл төшөргән картинаға йәки 1-2 йыл яһаған скульптураға ҡарағанда, ярты сәғәт ваҡытыңды алған карикатура йәмғиәттә күберәк шау-шыу тыуҙыра. Һәм һин шунда уҡ, халыҡ һөйөүе үҡ булмаһа ла, билдәлелек яулайһың. Әйҙә, шул-шул кешене, беҙҙең район башлығын һүрәткә төшөр, тип яҙа башлайҙар һиңә.

**Тимәк, унын насар эштәрен башҡалар күреүен теләйҙәр. Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн ниндәй генә заманда йәшәһә лә, кеше һәр саҡ ғәҙеллек көҫәй?**

- Кешенең ниндәй инстинкттары ихтыярыбыҙға буйһонмай? Енси теләк, ашҡаҙан талабы һәм балаларың тураһында ҡайғыртыу. Үҙенән байыраҡ кешегә ҡарап, кеше уның балалары үҙенекеләргә ҡарағанда именерәк, хәүефһеҙерәк урында булыуын күрәлер, моғайын. Тап ошо уны асыуландыралыр ҙа. Беҙгә тиклем дә был шулай булған, тағы ла мең йылдан һуң да шулай буласаҡ. Һәм был бар кешеләргә лә ҡағыла, иң бай кешенән дә байыраҡ кеше табыла. Фатир мәсьәләһе халыҡты боҙҙо, тип Булгаков әйткән бит. Әлбиттә, мин яңылыша ла алам, сөнки мин фәйләсүф түгел. Әммә, минеңсә, кеше менән үҙ ғаиләһен хәстәрләү идара итә.

**Кешенең характеры, унын, әйтәйек, ниндәй ҡылыҡтарға һәләтле булыуы йөҙөндә яҙыламы?**

- Мин шәхсән таныш булмаған кешеләрҙе фотоға ҡарап ҡына төшөрәм. Уларҙы белгәндәр, оҡшатҡанһың, бөтөн булған яҡшы сифаттары менән тотоп алғанһың, тиҙәр. Шаштыраларҙыр, бәлки. Әммә рәссамдың эске тойомлауы булырға тейеш. Ул анатомияны ла һәйбәт белергә бурыслы. Хатта карикатурист булһаң да, тән төҙөлөшөн белмәһәң, тамашасы һиңә ышанмаясаҡ, өсөн уға был исем бирелгән, ул турала уйламай ҙа.

**Бөгөнгө ижадығыҙ сәйәсәт менән бәйле, ә сәйәсәт гел үҙгәреп тора. Ҡытайҙарҙың, үҙгәрештәр осоронда йәшәргә Хоҙай ҡушмаһын, тигән әйтеме бар...**

- Мин быны менән килешмәйем. Тиҫтә йылдар дауамында төҙөлгән элиталар торғонлоҡҡа килтерә. Иң ҡыҙығы - үҙгәрештәр осоронда йәшәү.

Путинды әрләйбеҙ, икенсе яҡтан ҡарағанда, беҙ Рәсәйҙә бер ҡасан да былай яҡшы йәшәгәнебеҙ юҡ ине. Был үҙгәрештәр осоро ярайһы һуҙылып китте, быныһы икенсе мәсьәлә, әммә беҙ һәйбәт йәшәйбеҙ, тип иҫәпләйем. Ҡайҙалыр уҡығайным, үҙенә бөтөн донъянан өйкөлөшөп халыҡ ағылған ил генә үҙен башҡаларға өлгө итеп ҡуя ала. Әлбиттә, беҙгә бөтөн донъянан йүгермәйҙәр, әммә ярты континенттан киләләр, сөнки элекке Советтар Союзына ингән илдәрҙә йәшәүе мөмкин түгел. Ил башлығы ниндәй ысулдар менән быға өлгәшәләр, тик ул үҙенең эшен яҡшы башҡара. Бер ҡайҙа ла бында-

нимәһелер килешеп етмәгән кеүек буласаҡ.

Киндергә, әйтәйек, ыштан йәбештереп, йәки буяуҙар менән нимәлер һыҙғылап, картина тип атап булмай. Мин теге йәки был нәмәне шулай күрәм, тип, ошо ҡараштан сығып сыймаҡланған "картина"ларын һатырға оялмаусылар бар әле, етмәһә. Әгәр ҙә һин рәссам икән, уҡытыусыларың һине нимәгә өйрәткән, шуны күрһәтергә тейешһең. Һәр хәлдә, сәнғәткә ошолай ихтирамһыҙ ҡарауға ҡаршы мин. Күп рәссамдарҙың был фекерем менән ризалашмаясағын да беләм.

Рәссам үҙенең ижадына айыҡ аҡыл менән ҡарап, баһа бирә белергә тейеш. Ә бөгөнгө рәссамдың тормошо ябай. Күргәҙмә үткәреп, атҡаҙанған исеме алһа, бәхетле. Ә нимәғы кеүек ирекле юҡ. Митингтарҙы ҡыуалар тип зарланалар, әлбиттә, тик халыҡтың именлегенә хәүеф менән янаған митингтарҙы мин дә ҡыуыр инем. Әгәр ҙә ошо митингтар еңһә, нимә буласағын уйламай ундайҙар. Күршеләрҙә барған ваҡиғаларға ҡарап та быны бер яҡшы нәмәгә лә килтермәйәсәге асыҡ.

**Һеҙҙең ҡәләмегеҙҙең осона йышыраҡ кем эләгә?**

- Быға тиклем булған Республика Башлығы Хәмитов йышыраҡ эләгә, тип иҫәпләй инем. Хәҙер уйлайым: Радий Хәбировтың уны был йәһәттән уҙып китеүе ихтимал. Рөстәм Зәки улын йышыраҡ кире күренештәр менән бәйләп төшөрөргә тура килә ине, әллә ул үҙенең эшен күрһәтә белмәне инде. Радий Фәрит улы менән хәл киреһенсә.



***✓ Телевизорҙан Хәбировҡа ҡарайһың да, уның йөҙөндә - хис-тойғолар, күҙҙәрендә бәхет сағылғанын күрәһең. Малайҙар менән төшкән фотоларын ҡарағыҙ, ул бәхеттән балҡып тора.***

# СИКһЕҘ:

## кешенең алйотлоғо

Әгәр ҙә һинең эшең кешеләр менән бәйле икән, һин кеше-машина булырға хоҡуғың юҡ. Һин кеше булырға тейешһең. Телевизорҙан Хәбировҡа ҡарайһың да, уның йөҙөндә - хис-тойғолар, күҙҙәрендә бәхет сағылғанын күрәһең. Малайҙар менән төшкән фотоларын ҡарағыҙ, ул бәхеттән балҡып тора. Бәлки, уларға ҡарап, үҙенең ошолай малай сағын хәтерләгәндер, кем белә? Ошондай бер фотоһы менән генә лә ул күптәрҙең һөйөүен һәм ихтирамын яулағандыр, тип уйлайым. Тойғоларҙы йәшереп, кешене алдар өсөн йөҙгә ҡыуаныс хисе сығарып булмай бит - былар барыһы ла ихлас. Шуға малайҙар ҙа унан тартынмай, сит кеше тип ятһынмай. Министрҙарҙың отставкалары йәки башҡа нәмә менән түгел, ә ошо ихласлығы, ыңғай хистәре, тыуған иленә булған эскерһеҙ һөйөүе менән ул миндә нығыраҡ тәьҫир ҡалдырҙы.

**Юмор күңелде күтәрә, ул изгелек, ә сатира - аяуһыҙ һәм яуыз, ул кешенән көлә һәм уның ысын йөҙөн аса, тиҙәр...**

- Әгәр ҙә ул ысынға тап килмәгән ялғанға ҡоролған мыҫҡыллау булмаһа, сатира яуыз була алмай. Сатира бер ҡасан да насарлыҡ килтермәй, киреһенсә, ул төҙәтә генә. Бигерәк тә сәйәси сатира. Мин гел әйтәм, юмор тойғоһо булмаһа, власҡа үрләргә тырышырға ла кәрәкмәй. Сәйәсәттә юмор тойғоһо булмаған кешеләр юҡ. Ҡайһы бер сәйәсмәндәр, һин, туғаным, ҡатыраҡ төшөргәнһең, әммә дөрөҫ эләктергәнһең, тип тә әйтә. Кеше күрмәгәнде нисек һиҙҙең, тиҙәр. Берәү ҙә үпкәләп өндәшкәне юҡ әле. Үҙ-үҙеңдән көлөп алыу бер кемгә лә ҡамасауламай.

Икенсе яҡтан, шул уҡ депутаттар мәсьәләһенә килгәндә, мәҫәлән, мин һайлаған аҙаҡҡы депутат Тәлғәт Шабанов булды. 90-сы йылдар ине ул. БелАЗ водителе булып эшләй ине һәм ғәҙел һайланған депутат ине. Бөгөнгө депутаттар үҙ шәхесенә ҡарата ниндәйҙер ихтирам талап итә аламы һуң? Улар партия исемлектәре, буталсыҡ һайлауҙар менән үҙ-үҙҙәрен ошо хәлгә ҡуйҙылар. Мине халыҡ һайлап ҡуйҙы, тип ҡысҡырып әйтәһең икән, быға тәүҙә үҙең ышанырға тейешһең. Бындай депутаттың ниндәй абруйы булһын. Ике нәмә сикһеҙ, ғаләм һәм кешенең алйотлоғо. Шулай ҙа уның тәүгеһенең шулай булыуында тулы ышанысым юҡ, тигән бит Эйнштейн. Кешенең алйотлоғо сикһеҙ бит ул.

**Бөгөн, бигерәк тә интернет киңлегендә, мәҙәни мәғлүмәт берәмектәре булараҡ сәйәсимемдар ҙа билдәле күренешкә әйләнде. Был да кешенең граждандлыҡ әүҙемлеге күрһәткесеме?**

- Фотоға реплика йәбештереп ҡуйыу менән күптәр мауыға, унда аныҡ ҡына автор юҡ. Бындай күренештәрҙең барлыҡҡа килеүен бөгөн барған сәйәси процестарға тәьҫир итергә тырышыу тип аңларға ла мөмкин. Хатта ул дөрөҫ булмағанда ла, үҙ ҡарашыңды белдерергә тейешһең. Мин үҙ фекеремде әйтәм, кешеләр уның менән риза булмаҫҡа ла мөмкин. Иң мөһиме, мин үҙем был фекер менән ризамын һәм уны төшөргәндән һуң тыныс күңел менән йоҡлай алам.

"Социаль селтәрҙәрҙәге яңылыҡтар таҫмаһында һинең яңы эшең юҡ икән, тимәк, илдә бер нәмә лә булмаған, тигән фекергә киләм", - тип күптәр әйтә миңә. Кешеләргә әхлаҡи ориентир кәрәк һәм бөгөнгө көндә карикатуристың ориентир булыуы бик яманһыу, был дөрөҫ түгел. Дәүләт Думаһында һауынсылар, слесарҙар, металл ҡойоусылар, шахтерҙар юҡ, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан кешеләр: элекке спортсылар, йырсылар, 30 йәшлек генерал ҡатын-ҡыҙҙар абруйға әйләнә. Үҙем йәшәгән илде яманлағым килмәй, әммә 20 йылдан беҙҙә станокта эшләргә кеше лә табылмаясаҡ. Ябай һөнәр эйәләренән герой яһап, кешеләр менән идара итеп була, Советтар Союзында ошондай ҡеүәтле пропаганда алып барылды ла. Хеҙмәт кешеһе, ябай агроном Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән исемдәргә өлгәшеп, йондоҙға әүерелә ине. Элек ауыл хужалығы институтында уҡырға теләүселәр күп ине, хәҙер барыһы ла юрист булырға теләй. Сөнки депутат булып, юрист, иҡтисадсылар ултыра.

**Һеҙ - Буҙыҡай кантон булараҡ билдәле Мөхәмәтйән Буҙыҡаевтың ейәне. Уның шәхесенә бәйле ғаиләгеҙҙә быуындан-быуынға һөйләнә торған тарихтар бармы?**

- Мин уның 7-се быуын ейәне. Бала саҡтан уның тураһында ишетеп үҫтем, күберәк Фәйзрахман ҡартатайым һөйләй торғайны. Минең балаларым да, бигерәк тә улдарым, данлы ҡартатайҙары менән ғорурлана.

Борон батша улдары бөтөн Рәсәйҙе урап сығырға тейеш булған. Александр Икенсе лә әле батша булмаҫ элек, 16-17 йәшлек сағында, ошондай сәфәре ваҡытында ҡартатайым Мөхәмәтйән Буҙыҡаевта ҡунаҡта булған. Уның тел уҡытыусыһы В. Жуковский ҙа килгән, ул был сәйәхәтте һүрәтләп, ҡағыҙға төшөргән. Александр Икенсе батша итеп тәхеткә күтәрелгәс, башҡорттар ҙа барған унда, ҡошсолар, яугирҙар булған. Әммә тантаналы сарайға ике кеше генә саҡырылған, уларҙың береһе - Мөхәмәтйән Буҙыҡаев. "Буҙыҡай кантон" тигән халыҡ йырында әйтелеүенсә, ошо ваҡытта Александр Икенсе олатайыма генерал тигән хәрби чин бирә. Билдәле булыуынса, ҡайтып барышлай ул ағыулап үлтерелә. Тарихсылар батшаның уға генерал тигән исем биреүе мөмкин түгел, башҡорттар араһында батша генералдары булмаған, тиҙәр. Учалылар иһә ҡуш ҡуллап күтәреп алалар, беренсе батша генералы ла, совет генералы ла Учалынан, тип ғорурланалар. Уларҙың тәүгеһе - Мөхәмәтйән Буҙыҡаев, икенсеһе - Муса Мортазин.

Мөхәмәтйән Буҙыҡаев 1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында Парижды яулауҙа ҡатнаша, миҙалдар менән бүләкләнә. IV кантон башлығы була. Йылҡылар тота, күн заводы була, әрмегә эшләй. Билдәле яҙыусы Мамин-Сибиряк "Өмә" тигән хикәйәһендә тап минең ҡартатайҙың көнкүрешен һүрәтләй. Бесән өмәһенә тура килә ул. Ике улы ла Омск пехота училищеһында белем ала, офицер булалар. Уларҙың революцияға тиклем төшкән фотолары ла бар. Ә бына Мөхәмәтйән Буҙыҡаевтың һүрәте юҡ, бәлки, берәй ерҙә барҙыр, берәйһе был турала мәғлүмәт бирһә, бик шат булыр инем. Инәйем Салауат районынан, Салауат Юлаев нәҫеленән.

**Замандаштарыбыҙға әйтер ниндәй һүҙҙәрегеҙ бар?**

- Мин кешегә нимәлер кәңәш итергә сәйәсәтсе йәки профессор түгел. Мин дә барыһы менән бергә ошо заманда, йәмғиәттә йәшәүсе генә. Ябай кешегә хас ҡыуаныстар миңә лә ят түгел. Кем әйтмешләй, ҙур теләк менән эшкә йөрөһәң, ҙур теләк менән эшләһәң, аҙаҡтан ҡыуанып өйөңә ҡайтаһың - бәхет ошо инде. Ә тыныс йоҡлау өсөн үҙ-үҙең менән ғәҙел булырға ғына кәрәк. Әлбиттә, халҡымды мин бик яратам, ҡайһылыр замана бәләләре мине лә көйөндөрә. Милләтте, тәү сиратта, тел һаҡлай. Ә беҙ йәйләп башҡа халыҡтарҙан йотола барабыҙ, сөнки туған телебеҙҙә һөйләшмәйбеҙ. Тел бар икән, башҡаһы, шул иҫәптән рух та уға эйәрә ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Карикатуристарға хас үткер аҡыл, күҙәтеүсәнлек, аналитик фекер йөрөтә һәм күҙаллай белеү, үҙенсәлекле художестволы һәләтенән тыш, геройыбыҙҙың тағы бер сифатын тойомлағанһығыҙҙыр - ул үҙе теләгәнсә ижад итә. Ижад ниндәйҙер тыйыуҙарҙан, ҡурҡыуҙарҙан азат булғанда ғына үҙе йәшәгән йәмғиәтте яҡшыраҡ итә алалыр, ахыры. Бер кешенең азатлығы башланған ерҙә икенсе кешенеке тамамлана, тиҙәр, бәлки, уның ҡәләме осона эләгеүҙән ҡурҡыуҙан социаль һәм шәхси аҡылһыҙлыҡтар яһау, халыҡтың ышанысына хыянат итеүҙәр кәмей төшөр?**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**













ИҪТӘЛЕКТӘР

**Татьяна Львовна Сухотина-Толстая (1864-1950) бөйөк урыҫ яҙыусыһының өлкән ҡыҙы. Ғүмере буйы рухи яҡтан атаһының иң яҡын кешеләренең береһе була. Яҙыусы өлкән йәштәрҙә сағында ҡатыны менән аңлашылмаусанлыҡ барлыҡҡа килгән йылдарҙа ла Татьяна Львовна атаһын аңлай. "Ул атаһының да, әсәһенең дә күңелен йыуатырлыҡ яйлы һүҙҙәр таба ине", - тип яҙа уның хаҡында Л. Толстойҙың секретары В. Булгаков. Т. Л. Толстаяның иҫтәлектәре һәләтле яҙыусы ҡулы менән яҙылған. Тәүге иҫтәлектәр көндәлектәрен ул ун дүрт йәшендә башлай һәм ғүмере буйы дауам итә. Билдәле булыуынса, Лев Толстой башҡорт ҡымыҙы эсергә һәм далала ял итергә ғаиләһе менән дә килә. Таня башҡорттарҙы бик ярата һәм йылы иҫтәлектәр яҙып ҡалдыра.**
**Был иҫтәлектәр 1976 йылда Мәскәү ҡалаһында нәшер ителгән "Т. Л. Сухотина-Толстая. Воспоминания" тигән китабынан тәржемә итеп алынды.**



# ТОЛСТОЙҘЫҢ БАШҠОРТТАРҘА БУЛҒАНЫ,

## бәйге ойоштороғаны

* * *

Башҡорт ауылы йылға буйында ине. Мин, әлбиттә, берберенән ҡаты ер менән айырылып ятҡан бәләкәй-бәләкәй генә түңәрәк өҙөк-өҙөк ҡулдәрҙә бер нисек тә йылға (Кәрәлек йылғаһы - **М. Б.**) тип атай алмаҫ инем.

Өйҙәр таҙа һәм ыҡсым. Беҙ туҡтаған мулла ҡунаҡсыл һәм ихлас ҡаршыланы. Күп тә үтмәне, атайымдың элекке таныштары килә башланы. Улар араһында урыҫсалап Михаил Иванович тип йөрөткән көр күңелле өлкән йәштәрҙәге башҡорт бар. Ул килеү менән атайыма сатраш уйнарға тәҡдим итте. Атайым ризалашты. Уйнаған саҡта бер аҙ уйларға кәрәк булһа, Михаил Иванович сикәһен тырнап ҡуя ла:

- Думить надо. Ба-а-а-льшой думить надо, - ти.

Шул арала беҙҙең йорт хужаһының хеҙмәтсеһе һарыҡ һуйырға ебәрелде, ә аш әҙер булғанға тиклем беҙгә сәй һәм ҡымыҙ тәҡдим иттеләр.

Һарыҡ ите бешеп сыҡҡас, хеҙмәтсе киҫәк-киҫәк һимеҙ һарыҡ ите тултырылған һауыт алып инде. Мин, башҡорт ғәҙәте буйынса, ризыҡтан баш тартырға ярамағанлығын ишетеп белә инем (һүҙ һоғондороу йолаһы тураһында баралыр - **М. Б.**). Былдай хәл хужаның хәтерен ҡалдыра икән. Миңә һөйләүҙәренсә, ҡунаҡ өләшөнән баш тартһа, хужа иттең һимеҙ урыны менән ҡунаҡтың битен буяй башлай, шунан ҡунаҡ үҙ киҫәген ашарға мәжбүр була икән. Шуға ла хужа ит киҫәге алып миңә яҡыная башлағайны, мин тиҙ генә һоғоноп ҡуйҙым. Әйтергә кәрәк, ит киҫәген һоғоноу ҡыйын булманы, сөнки оҙон юлдан һуң асыҡҡайныҡ, ә ит бик йомшаҡ бешкәйне. Ул саҡта мин әле вегетарианка түгел инем, ул хаҡта беҙҙә телгә алыусы ла юҡ ине.

Атайым кем менән аралашһа ла уртаҡ тел таба торғайны. Һәр кеше менән ҡыҙыҡлы әңгәмә ҡорорлоҡ һүҙ таба ине. Мулла менән дин тураһында һөйләшһә, Михаил Иванович менән мәрәкәләште, ә хужа менән инде сәсеү, ат, һауа торошо тураһында һөйләште.

Төштән һуң беҙ йылҡы өйөрө ҡарарға барҙыҡ. Әсәйем бер ҡола бейәне маҡтаны - минең яратҡан төҫөм тине. Ә атайым бейәнең ҡолға тиҙ эйәләшеүен дә телгә алды.

Кәрәлек йылғаһы тип аталған түңәрәк күлдәр эргәһенән үткән саҡта һыу өҫтөндә аҡ томбойоҡтар күреп һоҡландым. Мин тымыҡ һыуҙы, ундағы матур сәскәләрҙе күреп ғәжәпкә ҡалдым. Ынтылып, бер генә сәскә өҙәйем тигәйнем, буйым етмәне. Шул саҡта мулланың йәш кенә улы, Нәғим исемле башҡорт, галушын, йомшаҡ ҡына йәшел ситеген сисеп, салбарының балаҡтарын төрҙә лә күлгә инеп китте. Бер гөлләмә томбойоҡтар өҙөп алды ла миңә бирҙе. Мин ундай иғтибарға өйрәнмәгәс, йөҙөмдө ҡыҙыллыҡ баҫты, эстән генә рәхмәт әйтеп, гөлләмәне алдым.

Энер төшкәс, беҙ киң күңелле хужалар менән хушлаштыҡ. Атайым менән әсәйем ултырып килгән арба тирәсенә әсәйем һоҡланған ҡола бейәне бәйләп ҡуйғайнылар. Хужа уны ҡунағына бүләк иткән. Көнсығыш халҡында оҡшаған нәмәне бүләк итеү йолаһы бар икән. Әсәйем бик ныҡ унайһыҙланды.

- Ҡалай оят! - тип аптыраны ул. - Ни эшләп улай итәһегеҙ? Белһәм, бөтөнләй маҡтамаған булыр инем...

Әсәйем бейәне кире ҡалдырмаҡсы булғайны, атайым тыйҙы. Бүләкте алмауҙың хужаны үпкәләтеү булғанын атайым белә ине.

Ул хушлашҡанда, мулланың ҡулдарын ихлас ҡыҫып, рәхмәт әйтте, һәм беҙ ҡайтып киттек. Арба тирәсенә бәйләнгән ҡола бейә күңелле генә саба ине, ә әсәйем йолаһы онотоуына, бейәне юҡҡа маҡтауына һаман үкенеп барҙы.

Атайым, хужаның ҡатыны менән ҡыҙы биҙәнеү әйбере итеп файҙаланһын өсөн, яйын тура килтереп, хужаға бер нисә тәңкә бирҙе.

* * *

Атайым, Степа (хеҙмәтсе - **М.Б.**), Ханна (Толстойҙарҙа бала ҡараусы - **М.Б.**) һәм хатта бәләкәй һеңлем Маша күпләп ҡымыҙ эстеләр. Улар иртә менән тирмәгә килтәләр. Тирмәлә уларҙы беҙ Мөхәмәтша Романович тип йөрөткән ғәжәп ягымлы һәм әҙәпле ҡарт башҡорт ире ҡаршы ала. Ул тирмә иҙәненә түшәлгән келәм өҫтөндәге яҫтыҡҡа аяҡтарын бөкләп ултырып ала, турһыҡтарҙағы ҡымыҙҙы болғандырып ебәрә, ижау менән туҫтаҡтарға ҡымыҙ ҡоя ла илтифатлы ҡиәфәттә ҡунағына һона. Атайым туҫтаҡты ҡушҡуллап ала ла бер тынала һемереп ҡуя.

Мөхәмәтша уның эсеп бөткәнен көтөп ултыра ла тағы ҡымыҙ ҡоя. Атайым ҡайһы саҡта икенсе туҫтаҡты ла бөтөргәнсе эсә лә, маҡтай.

Мин ҡымыҙ эсмәйем. Һаулығым насар булмағас, мине ирекһеҙләмәйҙәр ҙә. Ирҙәр ҡымыҙ эскән саҡта мин тирмәнең буҫтау менән бүленгән икенсе яғына инәм. Унда Мөхәмәтшаның ҡатыны Әлифә менән ейәнсәре Һәҙиә йәшәй. Әлифә һөйкөмлө генә, мөләйем, шул уҡ ваҡытта ире кеүек баҫалҡы һәм итәғәтле ҡарсыҡ. Һәҙиә - йәш кенә, бик матур ҡыҙ, ҡапҡара күҙле, ғәжәп һөйкөмлө итеп йылмая.

Ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә йөҙҙәрен күрһәтмәй. Шуға ла Һәҙиәгә ҡымыҙ эсеп ултырған ирҙәр эргәһенән үтергә тура килһә, ҡара бәрхәт еләне менән йөҙөн ҡаплай һәм йылдам ғына сығып китә.

Ҡатындар яғында мин ҡымыҙ бешергә ярҙам итәм. Йылҡы тиреһенән тегелгән ҙур һауыттарҙа бейә һөтө әсетәләр һәм оҙон ағас бешкәктәр менән болғатып торалар. Ҡымыҙҙы ни тиклем йышыраҡ бешәһең, шул тиклем һәйбәтерәк була икән. Мин башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кеүек талғын ғына итеп бешә алмайым.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары асыҡ сағыу төҫлө туҡыманан тегелгән кин, иркен күлдәк кейә, итәгенә икенсе төҫтәге туҡыманан ҡатмар һалына, иҙеү тирәһенә таҫма һалына һәм тәңкәләр тағыла. Толом остарына ла тәңкә тағалар.

Мин улар менән бейә һауған ергә лә бергә барҙым. Һәҙиә әле лә күҙ алдымда. Зифа буйлы, аяҡтарында ситек, башына бәрхәт елән бөркәнгән. Елән аҫтынан оҙон толомоноң осона таҡҡан тәңкәләре күренә. Атлаған һайын был тәңкәләр сыңлап китә. Ул бейәгенә баш күнәк элеп, бейәләр яғына атлай. Бейәләр алыҫ түгел, тирмәләргә яҡын ғына. Шунда уҡ ҡолондар ҙа бәйҙә тора.

* * *

Ҡайтыр алдынан атайым башҡорттарға бәйге ойоштороп китмәксе булды. Уның үҙенең дә дала аттарының сабышын ҡарағыһы килә ине.

Тирә-яҡҡа бәйге тураһында хәбәр таратылды. Теләүселәр көнөнә, сәғәтенә беҙҙең хуторға йыйылырға тейеш ине.

Атайымдың был ниәте башҡорттарға бик оҡшаны. Улар аттарын бәйгегә әҙерләй башланы. 10-11 йәшлек малайҙарҙың менгеләренә һыбай атланып, дала буйлап сапҡанын йыш күрергә була ине.

Атайым еңеүселәргә бүләктәр әҙерләне: беренсе урынға - сит ил мылтығы, икенсеһенә - көмөш сәғәт. Артабанғылары ебәк елән, ебәк яулыҡтар һәм башҡалар.

Бәйге башланыр алдынан бер нисә көн элек уҡ беҙҙең йорт янында тирмәләр ҡора башланылар. Һарыҡ һуйып, ит бешерҙеләр, бейә һауып, ҡымыҙ бештеләр. Атайым инглиз тоҡомло ике йәшлек тайын һуғымға бирҙе.

Башҡорттар далаға йыйылды ла асыҡ һауала ергә түшәлгән келәмдәргә ултырып, ҡымыҙ эсте, сатраш уйнаны, йырланы, бейене...

Көр күңелле Михаил Иванович үҙенең өс ҡатыны менән килде. Улар әлләкүпме бейәләр эйәртеп килде. Михаил Иванович атайым менән сатраш уйнаны, әммә күп осраҡта атайым еңеүсе булды.

Европа музыкаһына өйрәнгән беҙҙең ҡолаҡтарыбыҙ өсөн көнсығыш йырҙары ят ине. Көйҙәр һағышлы, моңло. Ҡурайҙа, һорнайҙа, тағы әллә ниндәй ят ҡоралдарҙа уйнаған ошо көйҙәргә башҡорттар талғын ғына баҫып бейей ине...

Ҡайһы бер башҡорттар тамаҡтары менән көй сығара ине (һүҙ өҙләү тураһында бара - **М.Б.**). Был ҙур оҫталыҡ талап иткән ғәжәп һөнәр. Былдай һөнәргә эйә булыусыларҙы башҡорттар юғары баһалай һәм ундайҙар бик һирәк.

Бәйгегә шундай бер оҫта килгәйне. Ул уйнаған саҡта барыһы ла тын ҡала ине. Башҡорт келәмгә аяҡтарын бөкләп ултыра, өҙләгәндә маңлайында тамырҙар бүртә, бите буйлап тир аға. Йөҙө үҙгәрешһеҙ, ирендәре лә хәрәкәтһеҙ, тик ҡайҙалыр тамаҡ төбөндә ниҙер көй сығара. Өҙләү тауышы саф һәм моңло.

Бына ул өҙләүен тамамланы. Һуңғы ауаздарын өҙләгәндә, әллә һулышы, әллә һағышы күкрәген ярып килеп сыға һымаҡ. Был моң барыһын да ныҡ тәьҫирләндерә.

- Йә, тамаҡ төбөнә йәшергән музыка ҡоралын күрһәт әле, - ти атайым.

Башҡорттоң арыған йөҙөндә йылмайыу сағыла, ул башын һелкә. Уға күпереп торған ҡымыҙ менән мөлдөрәмә тулы туҫтаҡ бирәләр. Ул сарсаған, ҡымыҙҙы бер тынала эсә лә, ҡулдарын күкрәгенә ҡуйып, ял итә.

Ҡымыҙ тултырылған туҫтаҡ туҡтауһыҙ ҡулдан-ҡулға китә.

Түңәрәк эсендә ике башҡорт көс һынаша. Ул ысул түбәндәгесә: ике кеше ҡапмаҡаршы ултыра ла аяҡ табандарын бер-берһенә терәй. Шунан ныҡ ҡына таяҡ алып, икеһе лә шуға тотона ла, таяҡты үҙ яҡтарына тарта башлайҙар. Тубыҡтар саҡ ҡына бөкләнгән була. Тубыҡтары яҙылып, аяғүрә баҫҡан кеше еңелә. Ә уны тартып торғоҙоусы еңә.

Мин һәр ваҡыт башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары эргәһендә булдым. Уларҙың йырҙарын тыңланым, бейеүҙәрен ҡараным.

Бәйгелә беҙҙең атыбыҙ ҙа ҡатнашты. Ул бишенсе булып килде. Һыбай сапҡан малайҙар шатланышып бүләк алалар ҙа атайҙарына тотторалар.

Иртәгеһен барыһы ла тарала башланы.

Бәйгенең башынан аҙағынаса бер генә тәртип һаҡлаусы ла булманы, тәртип тә боҙолманы. Бөтөн саралар ҙа һәүетемсә, тыныс, баҫалҡы, тәртипле, шул уҡ ваҡытта ғәжәп күңелле үтте. Бер генә аңлашылмаусанлыҡ та булманы.

Бер аҙҙан беҙ Һамар яҡтарынан ҡайтып киттек.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА**
**әҙерләне.**

ЗАУЫҠ

*Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ*

# ҠАРАЛАМАЛАҒЫ ПОЭМА

**(Һүнеп барған ауыл тупһаһында күргән төш)**

*Ауыл урамы,*
*Шомло тыҡ(ы)рыҡ.*
*Көнбағыш сиртәм*
*Яңғыҙ ултырып.*

*Көнбағыш һорап*
*Килеүсе лә юҡ.*
*Килеп теңкәгә*
*Тейеүсе лә юҡ.*

*Теңкәгә тейә*
*Ошо моңһоҙлоҡ.*
*Бар гәм үҙемә -*
*Ниндәй ҡомһоҙлоҡ!*

*Тыҡ(ы)рыҡ аша*
*Йүнәләм күлгә.*
*Ауылым ҡото*
*Күптәнән үлгән.*

*Сабый тауышы*
*Таныҡ ауылға.*
*Заман ағама*
*Тағы ни булған?*

*Заман - ағаймы?*
*Ул үгәй хәҙер.*
*Көндән-көн ерҙә*
*Юғала ҡәҙер.*

*Беҙ был замандың*
*Үгәй балаһы.*
*Яңы быуаттың*
*Ҡайҙа Аллаһы?*

*Үгәй моңдары,*
*Үгәй улдары.*
*Яҙҙары үгәй,*
*Үгәй йылдары.*

*Иң тәүҙә тымды*
*Гармун моңдары.*
*Аҙаҡ ҡый баҫты*
*Мәктәп юлдарын.*

*Ауыл урамы -*
*Шомло тыҡ(ы)рыҡ.*
*Көнбағыш сиртәм*
*Яңғыҙ ултырып.*
*Хәбәр һат ине*
*Ауыҙ тултырып.*

*Кешеләр күптән*
*Теге донъяла.*
*Уйҙар зар булып*
*Аҡҡа ҡойола.*

*Теге донъябыҙ -*
*Интернет инде.*
*Шунда көн күрә,*
*Ҡарама кемде.*

*Көнбағыш сиртә*
*Ауыл моңайып.*
*Әйҙә, бер юлы*
*Көрт тә һуғайыҡ!*

*Эттәр ҙә өрмәй,*
*Һыҙғырмай урам.*
*Оломай бүре*
*Сыҡһа ла буран.*

*Олор бүреләр*
*Олоп туйҙылар.*
*Илемде тере*
*Килеш һуйҙылар.*

*Көнбағыш сиртә*
*Өҫтәгеләр ҙә.*
*Уларға хаҡты*
*Өҫтәнеләр ҙә...*

*Йоҙаҡ эленгән*
*Күпме йорттарға.*
*Уян, ауылым,*
*Етәр йоҡларға!*

*Ауыл тигәнем*
*Зыярат таһа.*
*Шулмы заманға*
*Тейешле баһа?*

*Ул зыяратта*
*Тере мәйеттәр.*
*Юҡ табыш эҙләп*
*Йөрөмәй эттәр.*

*Унда муллаһыҙ*
*Ерләнә мәрхүм.*
*Их, хәйер өсөн*
*Һалнағыҙ бер һум.*

*Үҙәккә үтә*
*Бушлыҡ, эшһеҙлек.*
*Ниҙәр күрһәтмәй*
*Илгә тешһеҙлек.*

*Булған тештәре*
*Ҡыуыш та серек.*
*Ҡасан нигеҙгә*
*Яраған ерек?*

*Ә үткер тештәр*
*Ҡойолоп тора.*
*Уның юҡлығы*
*Тойолоп тора.*

*Ауыл урамы,*
*Шомло тыҡ(ы)рыҡ.*
*Кесерткән үҫә*
*Унда ҡотороп.*

*Ҡотороусылар*
*Көсәй кесерткән.*
*Уларҙы аҡса*
*Еҫе иҫерткән.*

*Тыҡ(ы)рыҡ аша*
*Йүнәләм күлгә.*
*Ауылым ҡото*
*Бик күптән үлгән.*

*Үтте бала саҡ*
*Шул күл буйында.*
*Сәмле ярыштыҡ*
*Һабантуйында.*

*Өлгә алдыҡ беҙ*
*Олатайҙарҙан.*
*Алыҫ йөрөнөк*
*"Һулаҡайҙарҙан".*

*Ауылдың йөҙө -*
*Хөрмәт бабабыҙ.*
*Данын алмашлап,*
*Түшкә тағабыҙ.*

*Орден-миҙалы*
*Илленән артыҡ.*
*Уға ҡыҙыға*
*Йәше лә ҡарты.*

*Миҙал сыңында*
*Тарих шаңдауы.*
*Хөрмәт олатай*
*Үткән яу-дауы.*

*Яуҙар үткән ул,*
*Ут-һыуҙар кискән.*
*Дошмандың башын*
*Йәлләмәй киҫкән.*

*Ауылдың йөҙө -*
*Ил даны ине.*
*Уның хөрмәтен*
*Ил таный ине.*

*Ҡурай ҙа тартты,*
*Гармун уйнаны.*
*Йыйында йырлап,*
*Бейеп туйманы.*

*Ил йәнле ине*
*Хөрмәт уҙаман.*

*Өлкәнгә хөрмәт*
*Булды ул заман.*

*Тик ошо күлдә*
*Тонсоҡто Хөрмәт.*
*Уны хөрмәтләп*
*Ҡайттылар ерләп.*

*- Батырғандар бит, -*
*Тигән һүҙ булды.*
*- Нисек? Һәр кемгә*
*Ул бит үҙ булды?*

*Ейәндәренә*
*Ул өлгә булды.*
*Тик яңы дәүер...*
*Их, төлкә булды.*

*Нәфсе Ғәҙелде*
*Упҡынға тартты.*
*Ул хәтерләтте*
*Тонсоҡҡан ҡартты.*

*Шуға хөрмәткә*
*Хәҙер хөрмәт юҡ.*
*Уны яҡтыртыр*
*Ихлас һүрәт юҡ.*

*Ошо гәмһеҙлек -*
*Илгә яман шеш.*
*Был күренештәр*
*Әллә яман төш?*

*Тупаҫ салғылар*
*Эленеп тора.*
*Малдың юҡлығы*
*Беленеп тора.*

*Тутығып бөткән*
*Сөй, сүкеш, бырау.*
*Ауылды һуҡҡан*
*Сәйәси ҡырау.*

*Балта ла ята*
*Серек теш кеүек.*
*Былар барыһы*
*Яман төш кеүек.*

*Заман йөҙөләй*
*Поэмам бушаҡ.*
*Иҫәп бар уны*
*Ҡуйырға тышап.*

*Тик уйҙар һаман*
*Ярһыу ат кеүек.*
*Был яҙғандарым*
*Илгә хат кеүек.*

*Ләкин үҙемә*
*Ҡаршы мат кеүек.*
*Шағир - халҡына*
*Бөгөн ят кеүек.*

*Хаҡ һүҙ әйткәндәр*
*Отолоп тора.*
*Заман уларҙан*
*Ҡотолоп тора.*

*Күптәр упҡынға*
*Йотолоп тора.*

*Ләкин шөрләргә*
*Иҫәп юҡ минең.*
*Йөрәгем - йәйә,*
*Һүҙем - уҡ минең.*

*Мине ҡурсалай*
*Бабичтар уты,*
*Рәмиҙәр рухы,*
*Түләктәр ҡото.*

*Улар алдында*
*Намыҫым таҙа.*
*Шуға ла иблис*
*Ғәрлектән аҙа.*

*Ул ҡоротмаҡсы*
*Ауыл нигеҙен,*
*Халыҡҡа шайтан*
*Һыуын имеҙеп.*

*Ауыл нигеҙе -*
*Ил таянысы.*
*Тик нигеҙ ҡорой -*
*Иң аянысы.*

*Ауылдан сыҡҡан*
*Рухи әһелдәр.*
*Уның күптәре*
*Хәҙер бәхилдәр.*

*Башҡорт ауылы,*
*Һиңә бар өмөт.*
*Тик һиндә тыуыр*
*Рухани бөркөт.*

*Ауыл нигеҙе -*
*Илемдең йөҙө.*
*Ауыл нигеҙе -*
*Илемдең күҙе.*

*Ауыл яҙмышы*
*Бөгөн ҡалала.*
*Ил киләсәге*
*Сабый балала.*

*Рухи тәрбиә*
*Бишеге - ауыл.*
*Ауылға ҡайтам,*
*Таш ҡала, һау бул!*

*Уянып барам,*
*Ятам баҫлығып.*
*Был йортта кем бар?*
*Ҡапҡа асығыҙ!*

*Ошо йортҡа ла*
*Иблис һыйынған.*
*- Кеше яҙмышын*
*Алма уйынға!*

*Ишетәһеңме,*
*Эй, заман-иблис!*
*Әллә һин - урыҫ?*
*Әллә һин - инглиз?*

*Донъяны бутап*
*Ҡоторһаһыңмы?*
*Бөгөн тәхеттә*
*Ултырһаһыңмы?*

*Ауылдар ҡотон*
*Кеҫәңә тыҡма!*
*Һуңғы өмөттө*
*Тереләй йотма.*

*Ауылдар ҡото -*
*Башҡортом ҡото.*
*Иблис, елкәңдән*
*Алһамлы тотоп.*

*Һығып алырмын*
*Йотҡан ҡиммәтте.*
*Ҡыра алмаҫһың*
*Аҫыл милләтте.*

*Милләт-ҡиммәттең*
*Нигеҙе ауыл.*
*Яланға ҡайтам,*
*Таш ҡала, һау бул!*

*Уянып барам,*
*Ятам баҫлығып.*
*Был йортта кем бар?*
*Ишек асығыҙ!*

*Бит уянырға*
*Ваҡыт, эй, туған!*
*Буш шешә менән*
*Ана, өй тулған.*

*Шайтан ләззәте*
*Туйымлыҡ түгел.*
*Иман нурына*
*Тартынлын күңел!*

*Уян, ауылым!*
*Уян, танышым!*
*Бер ишет әле*
*Аҙан тауышын.*

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

## Самауыр торбаһы

Егет ҡорона яңы ингәс әле тәмәкегә хиресләнеп киттем бит бер заман; дуҫ егеттәргә эйәреп борхотам, ҡыҙҙар алдында сифатлы ҡапты шыптырҙатып аҫҡан булып фильтрлы сигарет сығарып ҡабам. Килештерәм инде. Хәтәр ҙә һуң! Ошолай ҡыланыуҙарым үҙенә күрә ысын ир-егет сифатында күренергә ынтылыу ғәләмәте булғандыр, күрәһең. Тәмәке тартыуымды һиҙеп ҡалған күрше ҡатын ошо хаҡта беҙгә еткергән бит.

Бер көн әсәйем кибеттән ҡайтып инде лә яулығына бөрөп тотҡанын тотошлайы менән өҫтәлгә бушатты. Башҡа бер ни ҙә юҡ, тауҙай сигарет ҡаптары!

Ғәжәпләнеп киттем:

- Өйҙә тартыусы юҡ та баһа, былар кемгә ул тағы? - Белмәмеш тә һиҙмәмеш булып ҡыланам.

- Кемгә, тип, һиңә... Тәмәкегә һалышҡанһыңмы, әллә һабышҡанһыңмы, тип ишетеп ҡалғайным көтөү ҡыуғанда. Кем етте шунан һорап, теләнселәп йөрөмәһен, тип пенсияма алдым әле ошоларҙы. Әйҙә, мас булғансы, ғарҡ кикергәнсе рәхәтлән!

Ғәйепле икәнлегемде белгәс баш баҫып өндәшмәнем.

Кискеһен клубтан ҡайтҡас йоҡоға китергә лә өлгөрмәнем, әсәйем ипле генә итеп ҡабырғама ҡағылды:

- Тор, балам, быҫҡытып ал!

- Тартмайым, тартҡым да килеп тормай әле!

- Ай-һай, ышанғым килмәй... Тәмәкесе бит төнө буйы ҡүләгәләй, әүернәләй төтән көсәп йөрөп сыға, шуға һинең хәленә инеп уятырға иткәйнем дә...

Үпкәләгәндәй итеп икенсе ягыма әйләнеп яттым. Инде генә әүелйей башлағайным, йәнә шым ғына өндәшеү ишетелде :

- Ваҡыт етте, ҡуй, улайтып йонсоп ятма!

Шулай бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлап-тыҡып, сәғәт һайын уятып таң атҡансы ыҙалатты әсәйем.

Иртәгеһен сәй янында һүҙ башланым:

- Әсәй, мин ул нимә менән мауыҡмайым, мауыҡманым да, ысынлап әйтәм, егеттәргә эйәреп шаярыштырып алғайным бер аҙ... Хатамды аңланым, ант итәм, инде ауыҙыма ла алмаясаҡмын!

- Ихтыярыңдан, көсөңдән килмәҫтәй булһа тәүбәгә килергә, әйтеү әйтергә ашыҡма, ана ята тәмәке! Айлыҡ пенсиям төтән булып осоп торор инде бынан бүтән. Ошоғаса хәләл аҡсамды елгә елгәрермен тип ике ятып бер төшөмә инеп сыҡмағайны. Ҡайһылай итәһең инде, яҙғаны шулдыр...

- Ул нимәгә ҡағылмаясаҡмын, тинем бит! Әбыларҙы, - тәҙрә төбөнә теҙелгән ҡаптарға ымланым, - күрше ағайға индер!

Әсәйем сығып китеп самауыр торбаһын индерҙе лә бер һүҙ ҙә өндәшмәй өҫтәл ҡырына һалды.

Хәҙер тәмәке тартыусыны күрһәм, тап итһәм эсен ҡара ҡором баҫҡан самауыр торбаһы күҙ алдыма килеп баҫа.

## Мыжыу

Илаҡ булды ла һуң минең малай! Өс ай тулғансы, теңкәне генә ҡоротто. Төн етһә, ҡатын менән сиратлашып йөрөп сығабыҙ. Ҡулға ла ныҡ өйрәнеп алды: күтәреп йөрөткәндә яурынға талпан һымаҡ һылашып шымтая ла, сәңгелдәгенә һалһаҡ, ҡабаттан ярһып тызылдарға тотона. Хет ҡолаҡтарыңды яҫтыҡ менән томала!

Бөгөн минең сират. Йоҡо эләккәндә тип, ҡатын рәхәтләнеп мышнай бирә. Мин, өҫтәл шәмен ҡабыҙып, ҡулғәләй улай-былай йөрөйөм. Йоҡламай ятҡандыр, күрше бүлмәнән әсәйем сыҡты.

- Килтер бәпесемде, әҙерәк үҙем алып ултырайым, һиңә иртәгә эшкә, ял ит.

- Рәхмәт әсәй, - ҡулымдағын тоттора һалдым, аҡлангандай әйткән булдым. - Кемебеҙгә оҡшағандыр, бигерәк илаҡ, ҡасан тымырға самалайҙыр был малай?

Әсәйем салланған сәстәрен һыпырҙы:

- Бала тигәнең ғүмер буйы мыжый инде ул!..

***✓ Ҡорамдарыбыҙ бейегәйә, тамағыбыҙ туҡ - ә беҙ һаман бәхәсләшәбеҙ, зарланабыҙ. Шөкөр итеү тигәнде бөтөнләй онотторҡ. Былай барһа, бер көн килеп ысынлап та емерек ҡорамдарға, ярыҡ ялғашҡа ҡалмаҫмы икән көнөбөҙ?***



ИНТЕРНЕТТАН



# КҮП ҺӨЙЛӘП...
## ирендe көйҙөрмә

■ Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәткә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә, имеш. Был көн гүзәл заттар өсөн иң ауыры, ти ғалимдар. Бөйөк Британияның St.Tropez косметик фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегe өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

■ Бер төркөм Америка ғалимдары тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡараштa булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы нығыраҡ була икән. 15 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәр, унда 45-84 йәштәге 5100 кеше ҡатнашҡан. Тән массаһы индексы, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, артериаль ҡан баҫымы кеүек факторҙары менән бер рәттән, уларҙың оптимист йәки пессимист булыуына ла иғтибар иткәндәр. Асыҡланыуынса, оптимистарҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икән.

■ Ғаиләлә килеп тыуған проблемаларҙы ирҙәр һәм ҡатындар төрлөсә кисерә. Ратгер университеты ғалимдары билдәләүенсә, бындай саҡта ҡатын-ҡыҙҙар борсола башлай һәм тормош иптәшенә ҡарата ышанысы һүрелә. Ир-егеттәр иһә быны тағы бер уңышһыҙлыҡ итеп кенә ҡабул итә. Күпселек ғаиләләрҙә йыш осраған проблемалар һәм кисерелгән тойғолар булып һағыш, хәүеф, өмөтһөҙлөк тора. Ауырлыҡтарға ҡараштар ҙа айырыла. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ проблеманы һөйләгәндән үҙен еңелерәк тоя. Ир-егетте был, киреһенсә, асыуландыра ғына.

■ Психик яҡтан тотороҡло булған кешеләр үҙҙәренең тормошо әлеге мәлдә үткәнгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ, ә киләсәк тағы ла яҡтыраҡ буласағына ышана. Депрессия мәлендә был инаныс тулыһынса юҡҡа сыға, ти белгестәр. Канада ғалимдары раҫлауынса, үткәндәргә ҡарағанда бөгөнгө яҡшыраҡ тип иҫәпләүселәр ун йылдан да ошондай уйҙа була. Ә кем үткәне менән бөгөнгөһө араһында айырма күрмәй, киләсәген дә төҫмөрләй алмай. Тап улар яйлап депрессияға килә лә инде. Депрессия хәлендәге кеше киләсәге тураһында уйлауған бөтөнләй баш тарта. Шуға ла уларҙы дауалаған саҡта ошоно иҫәпкә алырға һәм яҡшы үҙгәрештәргә көйләргә кәрәк, ти ғалимдар.

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Билдәле булыуынса, артерия стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар - фенол антиоксиданттары ҡан күҙәнәктәренә артерия стеналарына ултырырға ҡамасаулай. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# БӘХӘСТӘН БӘХЕТ ТЫУАМЫ?

**Туҡһан туғыҙ йортло ҙур ғына ауылда бик бәхетле кешеләр йәшәгән. Береһенән-береһе матурыраҡ, зауыҡ менән биҙәлгән өйҙәрҙә йәшәгән улар. Һәр хужалыҡты гүзәл баҡсалар уратып алған. Ауылдаштар йыл әйләнәһенә емеш-еләктән, йәшелсәнән өҙөлмәгән. Яҙҙарҙы дәртләнеп ҡаршы алғандар, йәйҙәрҙе көндәлек хеҙмәт менән күңелле үткәргәндәр. Байрамдарҙа уйнап-көлөп, йырлап-бейеп күңел асҡандар. Көҙ мул уңыш йыйғандар ҙа, ҡышҡыһын рәхәтләнеп ял иткәндәр. Ерҙә йәшәһәләр ҙә, күккә бағып, йондоҙҙарға ҡарап, өмөтләнгәндәр, йәшәйеш тураһында уйланғандар, киләсәккә ышаныс менән ҡарағандар, кейеҙ-келәмдәргә йыһан есемдәрен биҙәк итеп төшөргәндәр.**

Өс йылға бер тапҡыр июль айында ауыл кешеләре йәшәгән урындарынан йыраҡ булмаған яланда ҡорға йыйыла торған булған. Өс йылға бер тапҡыр кешеләр Аллаһы Тәғәлә тауышын ишеткән һәм үҙ һорауҙарына яуап алған. Маңлай күҙҙәре менән күрмәһәләр ҙә, кешеләр күңелдәре менән эргәләренә килгән Хоҙайҙы тойғандар. Һәр кем ошо мәлдә киләсәккә уй-хыялдар ҡорған, Хаҡ Тәғәлә менән кәңәшләшкән. Мөғәмәлә төрлө кимәлдә барған: берәүҙәр тәрән уй-фекергә сумған, икенселәр ябай ғына донъяуи кимәлдә аралашҡан, өсөнсөләрҙең мөғәмәләһе уйын-көлкөгә ҡоролған.

Мәҫәлән, берәү ошондай һорау биргән:

- Хоҙайым, ниңә һин бөгөн беҙҙе ямғыр һыуына ҡойондорҙоң? Иртә менән лысма һыу иттең дә, төшкә ҡарай ғына ҡояш йылыһын өләштең. Әллә үҙең төшкә тиклем йоҡондан уянманыңмы, әллә беҙҙең байрам майҙанына йыйылғанды көтөп торҙоңмо?

- Юҡсы, - тип яуап бирә Хоҙай. - Мин иртә таңдан уҡ байрамығыҙ күңелле үтһен өсөн хәстәрлек күрҙем. Арағыҙҙа иртәнге тәһәрәт алырға йыбанғандар бар. Улар байрам йәмен ебәрмәһен, тинем дә, бөтәгеҙҙе лә бер юлы ҡойондорҙом. Әле бына таҙарынып кибендегеҙ.

- Улайһа, бик шәп иткәнһең, - тип ризалаша һорау биргән кеше.

Сәстәренә сал төшкән олпат ир бөтөнләй икенсе төрлө һорау бирә:

- Хоҙайым, әйт әле миңә, йыһандағы йондоҙҙарҙың мәңгелек тәртибе ни аңлата? Ерҙәге тормоштан биҙһәм, үҙем һайлаған йондоҙға ғаиләм менән күсенеп бара аламмы?

- Йондоҙҙар һеҙгә йыһан тураһында мәғлүмәт бирә. Ерҙәге ығы-зығынан арынып, күңел тыныслығына өлгәшә алһағыҙ, йондоҙло китап һеҙгә үҙ серҙәрен асыр. Әммә бының өсөн тән таҙалығы ғына етмәй, күңел сафлығы мөһим. Йыһан сикһеҙ - һайла, әйҙә, үҙеңә оҡшаған планетаны. Тик бының өсөн бер генә шартты үтәргә кәрәк: йондоҙҙағы ғүмерең, ерҙәге тормошоң менән сағыштырғанда, тик ижад менән генә һуғарылһын.

Шулай күңелле йәшәгән был ауыл халҡы.

Көндәрҙән бер көндө был ауылға бер ыңғайҙан йөҙ аҡыл эйәһе килгән. Киң күңелле ауылдаштар ят кешеләрҙе бик ҡунаҡсыл ҡаршы алған, һый-хөрмәт күрһәткән. Бындай муллыҡты күреп, хакимдәрҙең иҫе киткән. Уларҙың береһе былай тип һүҙ башлаған:



- О, кешеләр, һеҙ бик матур йәшәйһегеҙ. Әммә тормошоғоҙ үтә талғын, бер тигеҙ үтә. Һәр бер өйгә ҡот ҡунып, етеш йәшәһәгеҙ ҙә, Аллаһы Тәғәлә менән дөрөҫ һөйләшә белмәйһегеҙ, һеҙгә тәрбиәлелек етешмәй. Шуға күрә һеҙ Илаһи көскә дан йырлап табына белмәйһегеҙ.

- Юҡсы, бер ҙә улай түгел, - тип, ауылдаштар борсола башлаған. - Аллаһ менән беҙ өс йылға бер тапҡыр тиң күреп аралашабыҙ. Уны күрмәһәк тә, һәр иртәлә Ул беҙгә ҡояш булып балҡый, бал ҡорто булып бал йыя, ҡышҡы һалҡындарҙа ерҙе аҡ шәл менән ҡаплай. Ул һәр саҡ эргәбеҙҙә, беҙгә тәбиғәттең һәр миҙгеле ҡәҙерле.

- Юҡ, һеҙҙә эштәр дөрөҫ ойошторолмаған, - тигән аҡыл эйәләре. - Беҙ һеҙҙе Аллаһ менән аралашырға өйрәтергә килдек. Бөтә Ер шары буйлап ғибәҙәтханалар, матур-матур ҡорамдар төҙөлә. Был изге урындарҙа кешеләр Аллаһ менән көн дә һөйләшә ала. Беҙ һеҙҙе лә өйрәтәсәкбеҙ.

Өс йыл дауамында ауыл кешеләре аҡыл эйәләренең һүҙҙәрен диҡҡәт менән тыңлаған. Һәр хакимдың үҙенә хас ҡарашы, үҙ теләге булған: берәүҙәре ҡорамды нисегерәк эшләү тураһында аҡыл һатҡан, икенселәре ғибәҙәт ҡылыу тәртибе тураһында һөйләгән - һәр кем үҙ яғына ҡайырған. Ауылдаштарҙың ҡайһы аҡыл эйәһен һайларға белмәй баштары ҡатҡан. Етмәһә, улар сит кешеләрҙе рәнйетеүҙән ҡурҡҡан. Шуға күрә һәр өйҙә, һәр аҡыл эйәһен тыңлап, ҡорамдар төҙөргә булғандар. Тик ауылда туҡһан туғыҙ йорт булһа, аҡыл эйәләре йөҙ булған. Был яңы ауыл кешеләренең ҡарарын ишетеп, аҡыл эйәләре хафалана башлаған. Нисек инде улай, тимәк, бер аҡыл эйәһенә ҡорам етмәйәсәк, ул хәйер-саҙаҡаһыҙ ҡаласаҡ бит? Килмешәктәр кемдең теорияһы иң хаҡ икәнен иҫбатлап, бәхәсләшә башлаған. Яйлап был бәхәскә ауыл кешеләре лә ҡушылған. Бәхәс шул тиклем көслө булған: ауылдаштар өс йылдан һуң яланға ҡорға йыйылыу тураһында ла онотҡандар хатта!

Тағы өс йыл үткән. Ауыл тирәләй туҡһан туғыҙ мөһабәт ҡорам ҡалҡып сыҡҡан. Улар эргәһендә кешеләрҙең элекке өйҙәре йәмһеҙ һәм шөкәтһеҙ булып күренгән. Кешеләр емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе лә ҡарамаған, баҫыуҙар ташландыҡ хәлгә ҡалған, баҡсалар ҡороған.

Һәр аҡыл эйәһе үҙ ҡорамына бикләнеп, кешеләргә аҡыл һатҡан: "Һеҙ әле тулыһынса иманға килмәгәнһегеҙ. Хәйер-саҙаҡаны күберәк алып килегеҙ, көнө-төнө табынығыҙ".

Ҡорамһыҙ тороп ҡалған йөҙөнсө аҡыл эйәһе иһә йәшертен үҙ эшен алып барған. "Ғибәҙәтхана улай төҙөлмәй, табынғанда ла икенсе һүҙҙәр ҡулланырға кәрәк. Аллаһ менән нисек көн һайын һөйләшергә икәнен бер мин генә беләм", - тип өгөтләгән ул.

Әгәр ҙә ауылдаштарҙың береһе уның өгөт-нәсихәтенә инанһа, ауыл эргәһендә яңы ҡорам төҙөлгән, элеккеһе ташландыҡ хәлгә дусар булған. Хәҙер инде ҡорамһыҙ тороп ҡалған икенсе аҡыл эйәһе халыҡты үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан. Шулай бик күп йылдар уҙған.

Көндәрҙән бер көндө ауылдаштар өс йылға бер йыйылған элекке ҡорҙо иҫтәренә төшөргән. Аллаһ тауышын тағы үҙҙәренсә ишеткеләре килгән. Ауыл эргәһендәге яланға йыйылғас та, улар күмәкләп яуап таба алмаған һорауҙарын биргән: "Аллаһы Тәғәлә, әйтсе беҙгә, ни өсөн беҙҙең баҡсаларҙы ҡорт баҫты? Ни өсөн беҙ элеккеләй йыл да мул уңыш йыймайбыҙ? Ни өсөн кешеләр бер-береһе менән бәхәсләшеүҙән бушамай? Ни өсөн беҙ, күпме генә ыҙғышһаҡ та, үҙ иманыбыҙға ҡайта алмайбыҙ? Беҙ күпләп төҙөгән ҡорамдарҙың ҡайһыныһында йәшәйһең Һин"?

Кешеләр яуапты оҙаҡ көткән. Күктән был юлы күңелһеҙ, арыған тауыш ишетелгән:

- Эй, кешеләрем, мин һеҙҙе берҙәм итеп яралттым. Һеҙ берҙәм булғанда ғына илаһи хыялға ирешеп була. Ә һеҙ һәр берегеҙ, үҙ аллаһын эҙләп, айырым ҡорамдарға бикләндегеҙ. Ҡәҙерле балаларым, әйтегеҙсе, мин ҡайһы ҡорамда булырға тейеш? Бөтәгеҙҙе лә тиң күргәс, берегеҙҙе лә рәнйетмәҫ өсөн ҡайһы ҡорамды һайлайым? Һөйөү менән һайлау ирке һеҙҙең һәр берегеҙҙең үҙендә. Берҙәм ҡарарға килһәгеҙ генә хыялығыҙ тормошҡа ашыр...

Шулай тигән дә тауыш шымған. Ҡасандыр гөл-сәскәгә күмелгән ауылда йәшәгән кешеләр иһә бөгөнгәсә бәхәсләшә. Өйҙәре емерек, баҡсалары ташландыҡ хәлдә. Ҡорамдар бейегәйгән һайын бәхәс тә ҡыҙа бара...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Был кинәйәлә кемдәр һүрәтләнә, аңғарҙығыҙмы? Шулай шул. Ҡорамдарыбыҙ бейегәйә, ас-яланғас түгелбеҙ, тамағыбыҙ туҡ - ә беҙ һаман бәхәсләшәбеҙ, зарланабыҙ. Шөкөр итеү тигәнде бөтөнләй онотторҡ. Былай барһа, бер көн килеп ысынлап та емерек ҡорамдарға, ярыҡ ялғашҡа ҡалмаҫмы икән көнөбөҙ?**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

БАҠСА. ЙОРТ...

**"Өй һалыуҙың нимәһе бар - сутлайһы ла мүкләйһе", ти торғайнылар элегерәк. Заманалар үҙгәрә бара, өй һалыу ҙа ҡатмарлаша - материалдар ҡиммәтләнә, талаптар ҡәтғиләшә. Талаптар, тигәндән, хәҙер баҡсаларҙа ла өй һалып, унда теркәлергә мөмкин. Ғөмүмән, баҡсасыларҙы киләһе йылдан ниндәй яңылыҡтар көтә? Өй һалыу, ысынлап та, еңелме, әллә ауырмы? "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында спикерҙар - Росреестр идаралығының Башҡортостан Республикаһы буйынса етәксеһе урынбаҫары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Вәсилә Нурғәлиева менән Росреестрҙың федераль кадастр палатаһы БР буйынса филиалының директор урынбаҫары - баш технолог Андрей Пантелеев ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап бирҙе.**

# ӨЙ ҺАЛЫУҘЫҢ НИМӘҺЕ БАР...

**➔ Яңы йылдан баҡсасыларҙы ниндәй яңылыҡтар көтә?**

- Әлеге ваҡытта ғәмәлдә булып, баҡса, йәшелсә баҡсаһы, дача хужалығын алып барыу тәртибен көйләүсе 66-сы Федераль закон урынына 217-се Федераль закон ғәмәлгә инәсәк һәм ул коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ, йәшелсә баҡсасылығы ойошмаларын ойоштороу мөмкинлеген бирә. Шул уҡ ваҡытта, 1 ғинуарға тиклем ойошторолған ойошмаларҙы үҙгәртеү талап ителмәй. Яңы ҡанун рөхсәт ителгән ер участкалары төшөнсәһен тәртипкә килтерҙе. Әгәр быға тиклем баҡса, дача участкалары, йәшелсә үҫтереү һәм уларҙа хужалыҡ итеү төрҙәре рөхсәт ителһә, хәҙер улар баҡса, йәшелсә үҫтереү участкалары тип аталасаҡ. Йәғни дача атамаһы тарихта ҡала.

**➔ Был участкаларҙа ниндәй төҙөлөш эштәре алып барырға мөмкин?**

- Баҡса участкаларында торлаҡ, баҡса йорттары, хужалыҡ ҡороламалары (мунса, һарай, мөгәрәп, ҡоҙоҡ һ.б.), гараж төҙөргә була. Ә йәшелсә үҫтереү участкаларында хужалыҡ биналары төҙөлһә лә, улар күсемһеҙ милек объекты булып һаналмаясаҡ. Йәғни йәшелсә үҫтереүсе баҡсасылар участкаларында милеккә хоҡуҡтарын теркәй алмай.

Шулай уҡ закон баҡса йорто терминына аныҡ билдәләмә бирә - ул миҙгел ваҡытында ваҡытлыса файҙаланылған һәм көнкүреш ихтыяжын ҡәнәғәтләндергән бина. Баҡса йорто торлаҡ тип, йәки, киреһенсә, торлаҡ баҡса йорто тип таныла аласаҡ һәм был тәртипте РФ Хөкүмәте билдәләйәсәк. Әлегә тиклем баҡса йортон торлаҡ йорт тип таныу өсөн суд процедураһын үтергә кәрәк ине.

**➔ Участкала быға тиклем төҙөлгән объекттар ниндәй статуста буласаҡ?**

- Әгәр баҡса участкаларында бина быға тиклем торлаҡ булып теркәлгән икән, яңы йылдан улар автоматик рәүештә торлаҡ йорт тип иҫәпләнә. Ә инде хужалыҡ биналары автоматик рәүештә баҡса йорттары буласаҡ.

**➔ Милек хужаларына яңы документтар эшләргә кәрәк буласаҡмы?**

- Юҡ, әммә хоҡуҡҡа эйә кеше үҙе теләһә, алмаштыра ала. 2019 йылдың 1 ғинуарына тиклем йәшелсә үҫтереү участкаларында теркәлгән хужалыҡ биналары йәки ҡоролмалары шул килеш ҡаласаҡ, әммә 1 ғинуарҙан һуң бындай төр участкаларҙа нимәнелер теркәү тыйыла.

**➔ Торлаҡ йорттарҙы төҙөү һәм теркәү тураһында ла аңлатып китмәҫһегеҙме?**

- 2018 йылдың 4 авгусында ошо тәртипте регламентлаусы закон акттары ҡабул ителде. Был осраҡта, торлаҡ йорт төҙөү өсөн рөхсәт кәрәкмәй, әммә белдереү тәртибе ҡалдырыла. Әммә был үҙ белдегең менән төҙөлөш эштәре башлай алаһың, тигәнде аңлатмай. Бары тик процедура ябайлаштырыла, йәғни хоҡуҡ эйәһе төҙөлөшкә рөхсәт биргән органға махсус форма тултырып, кәрәкле документтарҙы беркетеп, төҙөлөш эштәре башларға теләгән белдереп, хәбәр итә. Артабан вәкәләтле орган ете көн эсендә документтарҙы ҡарап, йә рөхсәт бирә, йә ниндәйҙер етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә ҡушып, рөхсәт бирмәй. Етешһеҙлектәр бөтөрөлгәс, рөхсәт алына. Рөхсәт 10 йыл ғәмәлдә була, йәғни төҙөлөштө ошо осорҙа башҡарырға мөмкин. Әгәр хоҡуҡлы хужа ер участкаһын һата, кемгәлер бүләк итә икән, төҙөлөшкә хоҡуҡ икенсе хоҡуҡ эйәһенә күсә. Төҙөлөш тамамланғас, был хаҡта мотлаҡ вәкәләтле органға хәбәр итергә кәрәк. Был да уведомление рәүешендә эшләнә. Бындай ҡағиҙә баҡса хужалығында төҙөләсәк торлаҡ биналарына ла ҡағыла. Әммә бында яңы мөҙҙәт билдәләнгән: 2019 йылдың 1 мартына тиклем баҡсасылар өсөн иҫке тәртип ғәмәлдә булһа, артабан уларға ла уведомление бирергә кәрәк буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бәрәрфтәргә лә һалым һалалар!" тип зыҡ ҡупҡайны бер ваҡыт халыҡ. Әммә ҡанунда ныҡлы нигеҙ ҡоролоп төҙөлгән биналар хаҡында ғына һүҙ бара. Тимәк, мунса, гараж кеүек объекттарға ла һалым һалынасаҡ. Ә инде төҙөлөш өсөн рөхсәт алыуҙы мәғлүм итеү процедураһы (төҙөлөш алдынан һәм һуңынан) вәкәләтле органдарға һалым һалыу өсөн мәғлүмәт биреү тип аңларға кәрәктер. Хәйер, әлегә төҙөлөш объекттары, йортто киңәйтеү тураһында ваҡытында мәғлүмәт бирмәгән өсөн бер ниндәй ҙә административ яҙа ҡаралмаған, ә бына ерең булып та, унда төҙөлөш эштәре алып барылмаған өсөн яҙа бирелеүе ихтимал.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

КӨЛГӘНГӘ - КӨЛКӨ

# КИРӘМ ҠАЙҘА?



Бер мәл минә шылтыратып ебәрҙеләр.
- Һеҙ ебәргән фотола хата киткән! Беҙ ҙә мәлендә ҡарап еткермәгәнбеҙ икән.
- Ниндәй хата киткән һуң?
- Һеҙ "Солоҡсо кирәм менән солоҡҡа менеп бара" тигән фотоға яңылыш аңлатма биргәнһегеҙ, буғай. Кирәм унда юҡ. Ә солоҡсо бар.
Мин аптырап киттем.
- Нисек инде кирәм юҡ? Бындай хәлдең булыуы мөмкин түгел!
- Бына шулай шул. Кирәм юҡ. Солоҡсо бер үҙе генә солоҡҡа менеп бара. Хәҙер ул фотоны һеҙҙең электрон почтағыҙға ебәрәм.
Фотоға күҙ һалғас, аптырап, кире шылтыратам.
- Кирәм бар ҙа инде.
Хәҙер теге яҡ аптырай.
- Солоҡсоно, ҡарағайҙы, ниндәйҙер бауҙы күрәм. Кирәмде мин күрмәйем.
- Ана шул бау тигәнең кирәм була ла инде...
- Әәәәй, шулай менеј... Мин бит кирәмде беҙҙең ауылдағы Кирәм исемле ағай икән тип уйлағайным...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Ҡыҙыл төҫ ҡан баҫымын нормаға килтерә

Һәр көн иртән ҡыҙыл лампа яндырып, уға 30-ар секунд ustarығыҙҙы һәм аяҡ табандарын ҡуйып торорға кәрәк. Был процедураны ике аҙна дауамында ҡабатлағыҙ, ҡан баҫымын көн һайын тикшереп тороғоҙ. Өсөнсө-дүртенсе көндәрҙә гипотониктарҙың да, гипертониктарҙың да ҡан баҫымы нормалләшкәнен күрерһегеҙ.

## Баш ауыртыуҙарынан һөт ваннаһы

Аҡыл көсөргәнешенән, арыуҙан барлыҡҡа килгән баш ауыртыуҙарынан дарыуһыҙ арынырға өйрәнергә кәрәк. 2,5 процент майлы бер пакет һөт менән йыуып, уны ҡоротмай ғына киптереп, йән, етен, мамыҡ йәки шундай йомшаҡ туҡыма менән урап йоҡлағыҙ. Иртән сәсегеҙҙе йылы һыу менән сайҡағыҙ. Усығыҙ менән бер-ике минут ҡолағығыҙҙы ышҡып алһағыҙ, арыу, баш ауыртыуы үтәсәк йәки кәмейәсәк, көсөгөҙ күбәйәсәк, күҙегеҙҙең осҡорлоғо, ҡолағығыҙҙың ишетеү һәләте артасаҡ. Кешенең башы әйләнгәндә, мускулдар тартышҡанда, ҡолаҡтар шаулағанда, арығанлыҡтан күҙ алды ҡараңғыланғанда ҡолаҡтарығыҙҙы усығыҙ менән ҡаплап, уларҙы ҡыҙарғансы ышҡығыҙ. Бындай профилактика һәм дауалау процедураһын көнөнә ике тапҡыр, ә аҡыл көсөргәнешенә ваҡытында һәр сәғәт йәки ике сәғәт һайын ҡабатларға. Әгәр ул гәҙәткә инһә, көн һайын ҡабатлаған процедуралар́ҙан ыңғай һөҙөмтәләр күренәсәк.

## Ҡолаҡтарға массаж

Был һәр кеше үҙенә теләһә ҡайһы ерҙә күрһәтә алған иң ябай һәм хәүефһеҙ ярҙам. Мәғлүм булыуынса, организмдың барлыҡ ағзаларынан һәм системаларынан сыҡҡан биологик актив нөктәләрҙең каналдары ҡолаҡтарҙа тоташа. Ҡолаҡ йәрбесәге (япрағы) - беҙҙең миниатюралағы организмыбыҙ ул. Шуға күрә, ҡолаҡты һылап, барлыҡ организмдың эшмәкәрлеген әүҙемләштерәбеҙ, ағзаларҙағы ҡан әйләнешен яҡшыртабыҙ, баш мейеһе ҡабығын стимуллайбыҙ. Иң яҡшыһы - баш һәм һуҡ бармаҡ менән аҫтан өҫкә һыларға кәрәк. Тәүҙә - ҡолаҡ япрағын (ҡатын-ҡыҙҙарға алҡаларын һалып торорға тура килер), артабан - ҡолаҡ ситен, һуңынан - артын. Ауыртыу туҡтағансы ышҡырға кәрәк. Аҙаҡтан инде тотош ҡолаҡты аҫтан өҫкә баш йәки һуҡ бармаҡ менән спираль рәүешендәге хәрәкәттәр яһап һыларға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 2-3 минут шундай массаж эшләү зарур. Ауыртҡан урындарҙы бигерәк тә ныҡыраҡ һыларға кәрәк, сөнки улар ауыртҡан эске ағзаларға тура килә. Ҡолаҡтар ҡыҙарғансы ышҡыу яҡшы. Икенсе яҡтан, был ир-атҡа ла, ҡатын-ҡыҙға ла тулы енси мөнәсәбәттәрҙә булырға ярҙам итә.

## Умыртҡа һөйәген һылау

Умыртҡа һөйәген профилактик һылау һуҡ һәм урта бармаҡтар ярҙамында эшләнә. Көс етмәгәндә баш бармаҡ менән дә эшләргә мөмкин. Бармаҡтар ҡоймостан өҫкә - муйын яғына табан эшләнә. Һуңынан, киреһенсә, пациенттың баш яғынан тороп муйындан ҡоймосҡа тиклем һыларға кәрәк. Һылар алдынан арҡа ҡыҙарғансы йылытыла. Артабан уға, күгәреп ҡалмаһын өсөн, таҙартылған үҫемлек майы һөртәләр. Төптә ятҡан мускулдарға ла йоғонто булһын өсөн ныҡ баҫыу талап ителә. Тәүҙә бер нисә тапҡыр бармаҡтар менән умыртҡа һөйәге буйлап үтәһегеҙ, һуңынан һәр ҡабырға эргәһен йомшартаһығыҙ. Умыртҡа һөйәгенә ситтәрән мөмкин тиклем көслөрәк баҫырға мөмкин, урыҡа һөйәгенең үҙенә - ныҡ көслө баҫым яһарға ярамай.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 26 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 26 ноября. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Желтый глаз тигра". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "Познер". [16+]
1.05 "На самом деле". [16+]
2.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
4.05 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.35 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Бригада". [18+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Красная кнопка". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Тайм-аут".**
**20.00 Наука 102. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.15 Бизнес-проба. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Күстәнәс. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.45 "Весело живем". [12+]**
**0.00 Х/ф "Восьмерка". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Карагул". [12+]**
**5.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 27 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 27 ноября. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Желтый глаз тигра". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "На самом деле". [16+]
1.05 "Время покажет". [16+]
1.55 "Мужское / Женское". [16+]
2.50 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.35 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Бригада". [18+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 "Весело живем". [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [0+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Автомобилист" (Екатеринбург).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Бай". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Әлләсе... [12+]**
**23.45 "Весело живем". [12+]**
**0.00 Х/ф "Бумеранг". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 28 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 28 ноября. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Желтый глаз тигра". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "На самом деле". [16+]
1.05 "Время покажет". [16+]
1.55 "Мужское / Женское". [16+]
2.50 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.35 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Бригада". [18+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 "Весело живем". [12+]**
**15.00 Тәмле. [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Имею право. [12+]**
**17.00 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Хазина о Хазине. [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Бизнес-обзор. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Песня года". Хит-парад. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Самый лучший вечер". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 29 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 29 ноября. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Желтый глаз тигра". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "На самом деле". [16+]
1.05 "Время покажет". [16+]
1.55 "Мужское / Женское". [16+]
2.50 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.35 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Бригада". [18+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Позывной "Барс". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 "Весело живем". [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Сыйырсыҡ. [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.15 Современник. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Металлург" (Магнитогорск).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Алтын тирмә. [6+]**
**23.45 "Весело живем". [12+]**
**0.00 Х/ф "Телохранительница". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**4.30 "Весело живем". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 30 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 30 ноября. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Голос. Перезагрузка". [16+]
23.40 "Вечерний Ургант". [16+]
0.35 Концерт "Огонь Вавилона". К юбилею Бориса Гребенщикова. [16+]
2.00 "Время покажет". [16+]
3.00 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Модный приговор". [6+]
4.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.35 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Юбилейный вечер Владимира Винокура. [16+]
1.10 Х/ф "Моя мама против". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**14.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Бала-саға. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.00 "Гора новостей. [6+]**
**16.15 "Преград.net". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Победить себя... [6+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**19.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Позывной "Барс". [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Моя семья". [6+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Главная улика". [16+]**
**2.00 Спектакль "Ҡаһым түрә". [12+]**
**3.30 "Бай". [12+]**
**4.00 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.00 Х/ф "Главная улика". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 1 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Максим Перепелица". [0+]
7.55 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.45 М/с "Смешарики. Новые приключения". [0+]
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Владимир Машков. Один по лезвию ножа". [16+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "На 10 лет моложе". [16+]
13.00 "Идеальный ремонт". [6+]
14.00 Юбилейный концерт Ильи Резника. [0+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Премьера сезона. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Премьера. Валерий Сюткин. "То, что надо". Юбилейный концерт. [12+]
1.00 Х/ф "От имени моей дочери". [16+]
2.40 "Мужское / Женское". [16+]
3.30 "Модный приговор". [6+]
4.30 "Давай поженимся!" [16+]
5.20 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Смеяться разрешается.
12.50 Х/ф "Любовь по ошибке". [12+]
15.00 "Выход в люди". [12+]
16.15 Субботний вечер с Николаем Басковым.
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Никто кроме нас". [12+]
1.05 Х/ф "Осколки хрустальной туфельки". [12+]
3.10 Т/с "Личное дело". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Король Сафари". [0+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 Моя вершина. [12+]**
**10.15 Күстәнәс. [12+]**
**10.45 Автограф. [12+]**
**11.15 "Большой чемодан. [6+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 Книга. [0+]**
**13.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**13.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток).**
**19.00 Новости (на баш. яз.).**
**19.30 Республика Live. [12+]**
**20.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.15 Победить себя... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Моя вершина. [12+]**
**22.15 Следопыт. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Песня года". Хит-парад. [12+]**
**23.45 "Весело живем". [12+]**
**0.00 Х/ф "Побег за мечтой ". [16+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Спектакль "Дети мои". [12+]**
**4.15 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.00 Х/ф "Побег за мечтой". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 2 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.50 Х/ф "Улица полна неожиданностей". [0+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Улица полна неожиданностей". [0+]
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код". [0+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Строгановы. Елена Последняя". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Премьера. "Вокруг смеха" в Государственном Кремлевском Дворце. [12+]
13.20 "Наедине со всеми". [16+]
15.15 Х/ф "Приходите завтра..." [0+]
17.10 Премьера. Андрей Дементьев. Концерт-посвящение "Виражи времени". [12+]
19.30 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр.
23.40 Х/ф Премьера. "За пропастью во ржи". [16+]
1.45 Х/ф "Неукротимый". [16+]
4.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.05 Субботний вечер с Николаем Басковым.
6.45 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
13.40 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.55 Х/ф "Качели". [12+]
18.50 "Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
1.30 Т/с "Пыльная работа". [16+]
3.20 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**8.30 "Йома". [0+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей. [6+]**
**11.45 Замандаш. [6+]**
**12.00 Моя семья. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш.яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [6+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.00 Башҡорттар. [6+]**
**15.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Дорога к храму. [0+]**
**16.45 Д/ф "Еще вьется над крышей дымок..." [12+]**
**17.15 "Пусть сказочным будет детство!" Творческий вечер Айгиза Баймухаметова. [12+]**
**18.45 "Йөрәк һүҙе". [6+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Имею право. [12+]**
**19.30 Лидеры региона. [12+]**
**20.00 Әлләсе... [12+]**
**20.45 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Свидание с джазом. [12+]**
**0.00 Х/ф "Личный номер". [12+]**
**2.00 Спектакль "Женитьба". [12+]**
**4.30 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

✓ *15 апрелдән 15 июнгә тиклем, "Ыуылдырыҡ" операцияһы ойошторола. Балыҡтар ыуылдырыҡ сәскән осорҙа браконьерлыҡҡа ҡаршы көрәш алып барыу өсөн кәрәк - ошо ваҡытта ҡануниәт балыҡ тотоуға өҫтәмә сикләүҙәр индерә.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ НИНДӘЙ ЫРЫУ ТӨБӘГЕ?




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА** төҙөнө.

**46-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сибай. Ашҡаҙар. Рәсем. Алаша. Бүгәс. Мөғлифә. Буддизм. Зулус. Азамат. Абхаз. Күк. Ильяс. Әмер. Ринг. Томан. НЛО. Әсә. Вольтер. Кәкүк. Элмәлек. Любизар.

**Вертикаль буйынса:** Буранбай. Абдрахман. Илизаров. Арыш. Оруэлл. Амман. Соҡор. Кегль. Тәкә. Сәлимәкәй. Әреме. Йәрем. Кер. Бәз. Иртәк. Урал. Улъя. Сәс. Сөн.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Ноябрь-декабрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (18) дүшәмбе | 7:39 | 9:09 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 27 (19) шишәмбе | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 28 (20) шаршамбы | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 29 (21) кесе йома | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 30 (22) йома | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 1 (23) шәмбе | 7:47 | 9:17 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 2 (24) йәкшәмбе | 7:49 | 9:19 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо арала тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Өфө ҡалаһынан** Шәүрә Әбүбәкирова, **Архангел районы** Абзан ауылынан Тәслимә Рәхимова, Архангел ауылынан Рәғиҙә Ғиззәтуллина, Ҡысынды ауылынан Тәскирә Юламанова, **Күгәрсен районы** Яҡшембәт ауылынан Альмира Аллағыуатова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Ҡырмыҫҡалы ауылынан Рәмилә Фәхретдинова, Иҫке Бәпес ауылынан Райхана Ғиззәтуллина, Олокүл ауылынан Флүрә Сәлихова, **Салауат районы** Мөрсәлим ауылынан Рәшиҙә Сафина, **Стәрлебаш районы** Табылды ауылынан Файза Вәхитова, **Баймаҡ районы** Ишмырҙа ауылынан Зөбәйҙә Бикҡолова, Ғәрифә Йәләева, Сания Тотманова, Аҡтау ауылынан Рәшиҙә Иҫәндәүләтова, Әмин ауылынан Минзәлә Әүәлбаева, **Әбйәлил районы** Байым ауылынан Мәҙинә Ғәскәрова, Ғәзим Юламанов, **Ишембай районы** Әхмәр ауылынан Зөлфиә Кәримова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Көндәрегеҙ шатлыҡтар, яҡшы хәбәрҙәргә бай булһын, именлектә, муллыҡта йәшәгеҙ, сәләмәт һәм даланлы булығыҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!



## ҺАҠЛАРҒА!

**Башҡортостандың тәбиғәтте һаҡлау район-ара прокуроры тәҡдиме Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә хуплау тапты.** Хәҙер Башҡортостан биләмәһендә йыл һайын, 15 апрелдән 15 июнгә тиклем, "Ыуылдырыҡ" операцияһы ойошторола. Был балыҡтар ыуылдырыҡ сәскән осорҙа браконьерлыҡҡа ҡаршы комплекслы көрәш алып барыу өсөн кәрәк - ошо ваҡытта ҡануниәт балыҡ тотоуға өҫтәмә сикләүҙәр индерә. Төбәктең күҙәтеү ведомствоһы мәғлүмәттәренә ярашлы, һыу объекттарынан тыш, балыҡ ризыҡтары һатылған урындарҙа тикшереүҙәр уҙғарыу күҙаллана. Шулай уҡ балыҡҡа ветеринария документтарын тултырғанда ла контроль көсәйтелә. Рейдтарға тәбиғәтте һаҡлау органдарын, ветеринария хеҙмәттәрен һәм муниципаль властарҙы йәлеп итергә теләйҙәр.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24 ноябрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия 16+

**25 ноябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

**27 ноябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**28 ноябрь "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма 16+

**29 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**30 ноябрь "Иң бәхетле төн!"** (А. Касона), мелодрама 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27 ноябрь "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия 16+

**27-28 ноябрь "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 11.00 0+

**27-28 ноябрь "Униженные"** (З. Биишева), драма 12+

**28 ноябрь "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24 ноябрь "Слоненок"** (Р. Киплинг), 12.00, 14.00 0+, **"Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев), 18.00 16+

**25 ноябрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов), 12.00, 14.00 0+, **"О чем поет осень?"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24 ноябрь** "Көлкө шоу" эстрада миниатюралары театры тәҡдим итә: **"Ҡыҙыҡ был тормош"** йырлы-моңло, юмористик тамаша

**6 декабрь** "Карауан" төркөмө солисы, халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты **Тимур Рамаҙан** концертына саҡыра.

### Кем алыҡ?

Һорауҙарға беренсе булып дөрөҫ яуап биргән уҡыусы Тимур Рамаҙандың концертына билет ота аласаҡ. Тел.: 8-917-770-17-19

1. Тимур Рамаҙан ниндәй районда тыуған?
2. 2018 йылда ниндәй конкурста ҡатнаша, нисәнсе урынға лайыҡ була?
3. Ниндәй билдәле йырсылар менән дуэтта сығыш яһаған?

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЗӘЙНЕТДИНОВТАР...

## туғандары һәм халҡы менән көслө

(Башы 1-се биттә).

**Бәйгелә ҡатнашайыҡ тип кенә, бер көндә генә социаль йәһәттән әүҙем булып китеп булмай. Был еңеү йылдар дауамында алып барылған эшмәкәрлектең һөҙөмтәһелер, моғайын?**

- Эшмәкәрлек, тимәҫ инем, дөрөҫөрәге - йәшәү рәүеше. Беҙ бер ҡасан да халҡыбыҙҙың бөгөнгөһөнә, уның йәшәйешенә, мәҙәниәтенә битараф булманыҡ. Халҡыбыҙҙы күрһәтәйек, беҙҙе белһендәр, тинек. Быға балаларыбыҙҙы: ҡыҙҙарыбыҙ Ләйсән менән Илүзә, улыбыҙ Азаматты ла йәлеп иттек. Шуға ла был еңеүҙе ғаиләбеҙ менән 25 йылға яҡын башҡарған эштәребеҙҙең емеше, тип иҫәпләйем. Дөрөҫ баһа бирелде, лайыҡлы еңеп сыҡтығыҙ, тип әйтеүселәрҙең күп булыуы ла беҙҙең өсөн шатлыҡ, тимәк, халҡыбыҙ был юлы ла беҙҙең өсөн янып-көйгән.

Ояһында ни күрә, осҡанында шул булыр, тиҙәр. Мин үҙем дә, иптәшем дә өлгөлө матур ғаиләләрҙә үҫтек. Әсәйем элемтә бүлеге етәксеһе булып эшләне, гел халыҡ араһында булды. Халыҡ йырҙарын моңло итеп башҡарыр, гармунда, баянда уйнар ине, ҡатын-ҡыҙҙар советын етәкләне. Районда үткәрелгән бәйгеләрҙә ғаилә менән ҡатнашыр, гел беренселекте яулар инек. Шундай уҡ ғаиләгә килен булып төштөм, Зәйнетдиновтар туған йәнле, эшһөйәр, татыуҙар. Бер туған Зәйнетдиновтар һәм уларҙың балаларынан торған ғаилә ансамблен бөтөн республика белә. Конкурстың финалында 30 кеше сығыш яһаныҡ, был сараның иң матур өлөшө булды.

**Талантлы кеше бар яҡлап та талантлы була, Зәйнетдиновтарҙы ла етмеш һөнәр эйәһе итеп беләбеҙ. Ғаиләгеҙ тураһында һөйләгәндә нимәгә баҫым яһанығыҙ?**

- Быйыл ғаилә һәм волонтерҙар йылы, шуға ла ошо темалар сағылырға тейеш ине. Бөтөн һөнәрҙәр һәм эштәребеҙҙе 1 минутлыҡ сюжетҡа һыйҙырыуы еңел булманы. Миңлеғәфүр Зәйнетдиновты халыҡ оҫта ҡумыҙсы итеп белә, ул халыҡ музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәтә. Хәҙер уҡыусылары 4 меңдән дә ашып китте. Һәм быларҙы бер ҡасан да матди килем алайым тип түгел, халҡыма ярҙам итәйем, тип эшләй. Балалар ҙа төрлө-төрлө музыка ҡоралдарында уйнай. Мин быйылдан уҡытыусылыҡ һөнәрен ҡалдырып, ғаиләм менән бергә күргәҙмәләрҙә, оҫталыҡ дәрестәре үткәреүҙә ҡатнашам, ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли биҙәүестәрен яһау менән шөғөлләнәм.

Шулай уҡ беҙҙең ғаилә быйыл ҙур проекттың үҙәгендә булды. Йәй буйына Якутов паркында "Тирмәләр ҡаласығы" эшләне. Халыҡ күп йөрөнө паркка, улар өсөн концерттар ҙа, оҫталыҡ дәрестәре лә ойоштorҙоҡ. Әллә күпме кеше менән таныштыҡ. Ә был еңеүебеҙ башҡорт мәҙәниәтенең, сәнғәтенең юғары кимәлдә булыуын тағы бер тапҡыр дәлилләне, халҡыбыҙҙың берҙәмлеген күрһәтте. Был беҙҙең генә түгел, ә халҡыбыҙҙың еңеүе.

Ҡыҙым Ләйсән социаль селтәрҙәрҙәге битләүенә шулай тип яҙып ҡуйған: "Беҙҙең ғаилә айсбергтың өҫтө генә. Туғандарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ, халҡыбыҙҙың ошо еңеү өсөн һалған көсҡеүәте күренмәһә лә, уның нигеҙендә уларҙың тырышлығы ята". Баламдың был һүҙҙәренән шул тиклем күңелем булды. Тимәк, ғаиләлә һалынған тәрбиә нигеҙҙәре бушҡа булмаған - кеше туғандары һәм халҡы менән генә көслө.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАЛЫҠ БАРҘА ХАҠЛЫҠ БАР

Атаң барҙа ир таный, нәҫелең барҙа ил таный.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Илай-илай тыуабыҙ, зарлана-зарлана йәшәйбеҙ, донъянан төңөлөп үләбеҙ.

**(Томас Фуллер).**

Зоопарк - кеше булырға өйрәнеү өсөн бынамын тигән урын.

**(Эван Эзер).**

Бөйөк эштәргә хеҙмәт иткән кеше был эштәрҙе үҙенә лә хеҙмәт иттерә ала.

**(Томас Элиот).**

Ҡала - джунгли түгел, ә кешеләр зоопаркы.

**(Десмонд Моррис).**

"Шулай тип әйтәләр" тигән һүҙҙәр артына бөйөк ялған йәшеренгән.

**(Д. Маллох).**

Изгелек - бер ваҡытта ла туҙмай торған берҙән-бер кейем.

**(Генри Торо).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер уҡыусы уҡытыусыһы янына килә һәм шулай тип мөрәжәғәт итә:**

**- Уҡытыусым, ҡайһы саҡта минең холҡом тыйып тотҡоһоҙ булып китә. Асыуҙан нисек дауаланырға була икән?**

**- Улайһа, әйҙә, миңә ул холҡоңдо күрһәт! - ти уҡытыусы.**

**- Хәҙер генә мин һеҙгә уны күрһәтә алмайым, - ти уҡыусы.**

**- Ярай, улайһа, аҙаҡ күрһәтерһең,- тип мут йылмая уҡытыусы. - Ҡасан булдыра алаһың, шунда килтереп күрһәтерһең миңә ул холҡоңдо...**

**- Мин уны һеҙгә килтереп күрһәтә алмайым, - ти уҡыусы аптырап.- Ул бит миңә көтмәгәндә килә. Һеҙгә килтереп еткергәнсе, ул бит юҡҡа сыға...**

**- Улай булғас, асыу һинең айырып алғыһыҙ холоҡ үҙенсәлегең түгел, - ти уҡытыусы. - Әгәр ҙә ул һинең холҡоң икән, уны теләгән ваҡытта миңә күрһәтә алыр инең. Һин тыуғанда ул һиндә булмаған. Тимәк, ул һинеке түгел, ул ситтән килгән холоҡ. Шуның өсөн асыу йөрәгеңә килеп инеү менән таяҡ ал да уны туҡма, һинән ҡасып киткәнсе туҡма уны - минең кәңәшем шул...**

**...Ысынлап та, асыуығыҙ килһә, өйҙән сығығыҙ ҙа уны ете тапҡыр уратып йүгерегеҙ. Шунан ағас төбөндәге эскәмйәгә ултырып, асыуығыҙ ҡайҙа киткәнен күҙәтегеҙ. Һиҙҙегеҙме, асыуҙы кемгәләр күрһәтеүҙең, уны тыйыуҙың йә булмаһа уны баҫтырып ҡуйыуҙың кәрәге юҡ. Асыу өсөн көстө лә, һүҙҙе лә, нервыларҙы ла әрәм итеүҙең кәрәге юҡ икәнен аң менән тойорға ғына кәрәк. Быны аңығыҙ менән тойһағыҙ, асыу һеҙҙән бөтөнләйгә китәсәк..."**

ТЕЛЕБЕҘ ЫНЙЫЛАРЫ

**Халҡыбыҙҙа шундай һутлы һәм тере ҡуҙҙай баҙрап тороусы, ынйы кеүек аҫыл һүҙҙәр күп. Улар төрлө һүҙлектәргә инеп, халҡыбыҙҙың алтын фондын тәшкил итә. Үкенескә күрә, һуңғы быуын яҙыусыларының әҫәрҙәренә лә ул һүҙҙәр һирәк инә, улар, асылда, төпкөл ауылдарыбыҙҙа йәшәүсе инәйҙәребеҙҙең, олатайҙарыбыҙҙың тел осонда тере көйө йәшәй. Ул ынйыларҙы беҙ гәзитебеҙҙә "Әсәйем лөғәте" рубрикаһында бирә барабыҙ, әлбиттә. Хәтергә төшөрөүҙе дауам итәйек.**

# АТА-БАБАҢ ҠАЛДЫРҒАН ҺҮҘ

**Бармаҡсын** - тире уймаҡ; бирсәткә.
**Барсалау** - биҙәк төшөрөү.
**Барҫ** - ҡаты, тығыҙ итле.
**Бартансыл** - үсексән, кенәле.
**Барым** - көс, хәл.
**Баҫмалау** - артынан килеү.
**Баҫлығыу** - йоҡлағанда яман төш күреп, ҡурҡыу.
**Баҫымсаҡ** - бур ҡорт.
**Батаһын уҡыу** - ҙур эште тамамлау.
**Бауырмал** - терәк, төп мал.
**Баш-аяҡ** - бөтөнләй. Бәләһенән баш-аяҡ - бәләле булмайыҡ.
**Башау (мал, кеше)** - оҙаҡ йәшәгән; баш бирмәҫ.
**Башкөллө** - бөтөнләйгә.
**Башҡарыу** - үҙгәреү.
**Башлаш** - йәнәш.
**Башман** - ағас һауыт.

(Дауамы. Башы 43-46-сы һандарҙа).

АФАРИН!

# БИКБАЕВ ЕҢДЕ!




**Өфөлә республикабыҙ ойошторолоуҙың 100 йыллығына арналған "Минең данлы Башҡортостаным!" поэмалар конкурсына йомғаҡ яһалды.**

Конкурс еңеүсеһе тип Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев иғлан ителде. Уның "Һуңғы төн" поэмаһы күренекле башҡорт шағиры һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәйехзада Бабич ғүмеренең һуңғы сәғәттәренә бағышланған. Тамара Ғәниева менән Мәүлит Ямалетдиновтың поэмалары икенсе урынды алды. Өсөнсө урынды шағирҙар Лариса Абдуллина, Рита Фәтҡуллина һәм Ринат Сөләймәнов бүлеште. Мөнир Иҡсанов махсус бүләккә һәм Халыҡҡа юридик ярҙам күрһәтеү комитетынан 15 мең һумлыҡ сертификатҡа лайыҡ булды. "Бындай бәйгене тәүгә ойоштorҙоҡ. Конкурсҡа бөтәһе 30 авторҙан 40-ҡа яҡын поэма килде, - тип хәбәр итте Яҙыусылар союзы рәйесе, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаты Зәки Әлибаев. - Ошондай күләмдә яңы әҫәрҙәрҙең яҙылыуы әҙәбиәтебеҙгә ҙур этәргес бирә".

# ЙЫР БӘЙГЕҺЕ

**Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика йырсылар конкурсында Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы Гөлнара Вәлиева еңеү яуланы.**

Беренсе урын З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты студенты Наҙгөл Ибраһимоваға һәм филармония солисы Дамир Таиповҡа бирелде, икенсе урынды Өфө сәнғәт институты студенты Эльвина Әхмәтханова һәм башҡорт операһы солисы Рим Рәхимов алды, өсөнсө премияны сәнғәт институты студенттары Регина Хөснөтдинова, Айгиз Уйылданов һәм Радмир Хәсәнов бүлеште. Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика йырсылар конкурсы 1968 йылдан уҙғарыла. Конкурсты ойоштороусы - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы. Быйылғы йыр бәйгеһе республиканың 100 йыллығына бағышланды.

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
23 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 2141/11

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.